Рәшиҙә
Исхаки

Намаҙ уҡыу тәртибе

(1-енсе һүрәт)

тәкбир (2-енсе һүрәт)

киәм (3-өнсе һүрәт)

рөкүғ (4-енсе һүрәт)

сәждә (5-енсе һүрәт)

кәғдә (6-ынсы һүрәт)

уң якка сәләм биреү
(8-енсе һүрәт)

һул якка сәләм биреү
(9-ынсы һүрәт)

доға кылыу
(10-ынсы һүрәт)

Рәшиҙә Исхаҡи

НАМАҘ
укыу тәртибе

نماز اوقو ترتیبی

ДӘҒҮӘТ НӘШРИӘТЕ

Был китапты баҫтырыу өсөн яуаплы: Ильшат хәҙрәт Хафизов.

Китаптың тәржемәсеһе: Хөрмәтулла хәҙрәт Буранбаев.

Китапты өлөшләтә йәки тулыһынса күсереп алыу тыйылмай. Уны **www.dagvat.ru** сайтында табырға һәм бушлай күсермә лә эшләрәгә мөмкин.

Офсет ысулы менән баҫылды. Форматы 60 x 90 1/16. Тиражы 1500 дана. «Дәғүәт нәшриәте».

ИНЕШ

Әғүүзү билләәһи минәш–шәйтаанир – ражииим.

Бисмилләәһир – рахмәәнир – рахииим.

Намаҙ – мәғлүм рәүештә күңел үә тән менән Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыу. Иман килтергәндән һуң, иң сауаплы ғибәҙәт – намаҙ уҡыу.

Һәр бер мөъмин бәндәгә тәүлек әйләнәһенә биш ваҡыт намаҙ уҡыу фарыз: иртә, өйлә, икенде, ахшам һәм йәстү намаҙҙары.

Намаҙ уҡыу – ҡәберҙә нур һәм юлдаш, Нәкир үә Мөнкир фәрештәләренә яуап, мәхшәр көнөндәге эҫелектән күләгә, тамуҡ утынан пәрҙә, сират күперендә етәкләүсе һәм ожмахтың аскысы.

Ҡиәмәт көнендә иң әүүәле һораласаҡ ғәмәлебеҙ – ул намаҙ. Намаҙ – диндең терәге, мөъминдең нуры. Намаҙ уҡыған кешенең күңеле тыныс, доғаһы ҡабул, ризығында бәрәкәт һәм тәнендә сәләмәтлек булыр.

Изге ғәмәл һәм ысын тәүбә, намаҙ менән генә. Хаҡ намаҙ торғоҙһаң ғына, тыйылырһың боҙоҡлоҡтан.

Намаҙ менән Аллаһыға яҡынлығың арта. Намаҙ эсендә бәндә Аллаһы менән һөйләшә, намаҙ менән генә күңеле рәхәтлек таба, намаҙ арҡаһында Аллаһы менән рухы серләшә.

Ҡараңғылыктан яҡтылыҡҡа сығарыусы ҡорал – уҡыған намаҙың. Хаҡ намаҙ уҡыусы булһаң, күңел күҙең яҡтырыр.

Хөрмәтле ғәзиз ҡәрҙәштәрем!

Намаҙ уҡыһаҡ – беҙ Аллаһының ниғмәтләренә шөкөр итеүселәрҙән булырбыҙ, намаҙ уҡымаһаҡ – Раббым Үҙе һаҡлаһын, көфөрлөк ҡылып, буш ашап йәшәүселәрҙән булырбыҙ. Шуға күрә, ғәзиз ҡәрҙәштәрем, намаҙға бик иғтибарлы булайыҡ.

НАМАҘ УҠЫУ КЕМГӘ ЙӨКЛӘТЕЛГӘН

Намаҙ уҡыу бәлиғы булған һәм үҙ аҡылындағы һәр бер мосолманға фарыз.

Ата – әсәләр үҙ балаларына ете йәштән башлап, намаҙ уҡыу ҡағиҙәләрен өйрәтергә һәм уларҙы намаҙға баҫтырырға тейеш. Ун йәшкә еткәс, намаҙҙан баш тартҡандарын балаларға, өйрәтеү һәм күнектереү өсөн, физик яза бирергә мөмкин.

Рәсүлебеҙ Мөхәммәд ғәләйһиссәләм әйткән: ***«Балаларығыҙҙы ете йәштән намаҙға өйрәтегеҙ, ә ун йәштән намаҙға иғтибарһыҙлыҡтары өсөн һуғығыҙ һәм йоҡларға айырым һалығыҙ».*** Йәғни, ун йәштәге ир бала менән ҡыҙ бала айырым йоҡларға тейеш.

ҠАТЫН – ҠЫҘҘЫҢ КЕЙЕМЕ

Рәсүлебеҙ Мөхәммәд ғәләйһиссәләм әйткән: ***«Аллаһы Тәғәлә бәлиғы булған яп маһыҙ ҡатын-ҡыҙҙың намаҙын ҡабул итмәй».*** Йәғни, Аллаһы Тәғәлә бәлиғы булған ҡатын – ҡыҙҙың намаҙын бөтә кәүҙәһен (муйынын һәм башын, шулай уҡ,

бәкәлдәренә ҡәҙәре аяҡтарын) ҡаплап торған оҙон кейем кейгән осраҡта ғына ҡабул итә. Шул уҡ ваҡытта, кейем тәнгә һылашып торорға һәм үтә күренмәле булырға тейеш түгел. Аяҡтарға оҙон ойоҡ йәки ойоҡбаш кейергә мөмкин.

Намаҙ ваҡытында ҡатын – ҡыҙға ҡул менән аяҡ суктарын һәм йөҙөн асыҡ тотоу рөхсәт ителә. Намаҙҙан тыш ваҡыттарҙа ла, ҡатын – ҡыҙҙың кейеме, уның йөҙө, ҡул һәм аяҡ суктарынан башҡа, кәүҙәһен тулыһынса ҡаплап торорға тейеш.

Хушбуй, парфюмерия һәм биҙәнеү әйберҙәрен ҡулланмау шарты менән, ҡатын – ҡыҙҙарға мәсеткә йәмәғәт намаҙына йөрөү рөхсәт ителә.

Намаҙ уҡыйасаҡ кешенең тәне, кейеме һәм намаҙ урыны һәр төрле нәжестәрҙән таҙа булырға тейеш. Шулай уҡ, һәр намаҙ уҡыусыға шәриғәт бойорған рәүештә тейешле ағзаларҙы һыу менән йыуып, тәһәрәт алыу фарыз.

ТӘҺӘРӘТ

Тәһәрәт алғанда түбәндәге һигеҙ төрлө ғәмәл үтәлә:

1. Тәһәрәт алырға ниәтләгән кеше иң тәүҙә үҙенең ғәүрәт ағзаларын нәжестән таҙартыр, йәғни башта истибра, һуңынан таҙа һыу менән истинжә ҡылыр (*истибра* – кесе ярау иткәндән һуң, һейҙек юлында ҡалған тамсыларҙың сығып бөткәненә инаныу өсөн йүтәлләп йәки башҡа

төрлө хәрәкәттәр яһап, һейҙектән таҙарыныу. Истибра ҡылыу үәжип, сөнки һейҙек тамсылары тәһәрәт алғандан һуң сыҡһа, тәһәрәтте боҙалар. *Истинжә* – оло йәки кесе ярау иткәндән һуң истибра ҡылып, гәүрәт ағзаларын һыу менән нәжестән таҙартып йыуыу (оло ярау иткәндән һуң, башта берәй төрлө ҡоро нәмә менән, һуңынан һыу менән таҙартырға кәрәк)).

2. Беләҙектәренә тиклем ҡул суҡтарын өс тапҡыр (бәҙрәфтән һуң булһа, һабынлап таҙарғансы) йыуыр.

3. Уң ҡулының усы менән ауыҙына һыу алып, өс тапҡыр ауыҙын сайҡар.

4. Уң ҡулының усына һыу алып, шул һыуҙы танауына һурыр ҙа, һул ҡулы менән һеңгерер һәм шулай өс тапҡыр эшләр.

5. Маңлайындағы сәс ҡырынан алып, ике ҡолағына һәм эйәк аҫтына тиклем өс тапҡыр йөҙөн йыуыр. Һаҡалы булһа, бармаҡтары менән аралаштырып, уға ла һыу тигеҙер.

6. Терһәктәренә тиклем (терһәктәре менән бергә) ике ҡулын өс тапҡыр йыуыр.

7. Ике ҡул суғын һыуға сылатып, иң элек ус төптәре менән башын, һуҡ бармаҡтары менән ҡолаҡ эстәрен, баш бармаҡтары менән ҡолаҡ артын һәм һуңынан, ҡул суҡтарының һырты менән муйынын мәсехләр (йәғни, бер тапҡыр һыпырып сығыр).

8. Иң аҙаҡ бәкәлдәренә тиклем (бәкәлдәре менән бергә) ике аяҡ суғын өс тапҡыр йыуыр.

Тәһәрәтле кеше аяғына ситек йәки шуның кеүек бәкәлде тулыһынса ҡаплап торған аяҡ кейеме кейгәндән һуң, башҡа ваҡытта тәһәрәт алғанда, аяҡ суҡтарын йыуыу урынына, шул ситеген йәки шуның кеүек бәкәлде тулыһынса ҡаплап торған аяҡ кейемен мәсехләй (йәғни, ҡул суҡтарын һыуға сылатып, һыулы бармаҡтар менән уларҙың йөҙләгән бер мәртәбә һыпыра) ала.

Билдәләнгән ваҡыты сығыу (моҡымға бер тәүлек, мосафирға өс тәүлек) һәм ситек йәки шуның кеүек бәкәлде тулыһынса ҡаплап торған аяҡ кейемен сисеү менән мәсех яраҡһыҙға әйләнә. Уларҙы сискәндә, кеше тәһәрәтле булһа, аяғын ғына йыуыр ҙа, тәһәрәтле һаналыр.

Иҫкәрмә:

Әгәр берәй нәмә һыуҙың тәмен, төҫөн йәки еҫен үҙгәртһә, уны тәһәрәт һәм гөсөл алыу өсөн файҙаланыу тыйыла.

ТӘҺӘРӘТТЕ БОҘОУСЫ СӘБӘПТӘР

Тәһәрәтте боҙа торған төрлө сәбәптәр бар. Улар түбәндәгеләр:

1. ғәүрәт ағзаларынан бүлендек сығыуы (һейҙек, тиҙәк һ.б.);

2. эсәктәрҙән һаҫыҡ һауа сығыуы;

3. ауыҙҙан төкөрөрлөк, йәки танауҙан, йәки күҙҙәрҙән, йәки ҡолаҡтарҙан, йәки йәрәхәтләнеү сәбәбенән тәндән тамсыларлыҡ булып ҡан, эрен йәки һары һыу ағып сығыуы;

4. ауыҙ тултырып ҡоҫоу;

5. ятып йәки һөйәлеп йоҡлау;

6. аңды юғалтыу йәки иҫһеҙ ятыу;

7. үҙ аҡылыңда булмау (көслө дарыу тәъҫире аҫтында булыу һ.б.);

8. намаҙ уҡып торғанда ҡыскырып көлөү.

ҒӨСӨЛ

Ғөсөл – ул бөтә тәнде йыуып, һыу менән ҡойоноу. Ғөсөлләнәм тип ниәтләгән кеше түбәндәге тәртип буйынса эш итер:

1. истинжә ҡылып, гәүрәтләрен нәжестән таҙартыр;

2. беләҙектәренә тиклем ике ҡул суғын йыуыр;

3. тәһәрәт алыр, ләкин аяҡ суҡтарын йыумаҫ;

4. иң әүүәле башына, унан һуң уң яғынан башлап тәненең һәр бер ерен һыулап сығыр;

5. ҡулдары менән буйы еткән тиклем тәненең һәр бер ерен ышҡып сығыр;

6. икенсе мәртәбә, йәнә уң яғынан башлап бөтә тәненә һыу ҡойор һәм ҡулдары менән буйы еткән тиклем тәненең һәр бер ерен ышҡып сығыр;

7. өсөнсө мәртәбә йәнә уң яғынан башлап бөтә тәненә һыу ҡойор;

8. иң аҙаҡтан уң яғынан башлап ике аяҡ суғын йыуыр.

Ошо рәүештә ғөсөл алған кеше камил тәһәрәтле булыр. Намаҙ уҡыу өсөн яңы ғына ғөсөлләнгәндән һуң тәһәрәт алыу кәрәк түгел.

ҒӨСӨЛДӨҢ ФАРЫЗДАРЫ

Ғөсөлдең фарыздары өс:

1. ауыҙ эсен сайҡау;
2. танау эсен сайҡау;
3. тәндең һәр бер еренә һыу тигеҙеү.

Ғөсөлләнгәндә тәндең һәр бер еренә һыу тейһен өсөн сәс, ҡаш, һаҡал, мыйык кеүек төктәрҙең төптәренә, күҙ соҡоро кеүек эскә батып йәки йыйырылып торған урындарға һәм йөҙөк аҫтарына, тәнгә йәбешкән ҡамыр йәки дегет кеүек нәмәләр аҫтында ҡалған ерҙәргә лә һыу тейергә тейеш. Ҡатын – ҡыҙҙарҙан айырмалы булараҡ, ирҙәргә ғөсөл алғанда сәстәренең һәр бөртегенә һыу тигеҙеү фарыз. Әммә ҡатын – ҡыҙҙарҙың сәс толомдарына һыу теймәһә лә ярай, сәс төптәренә генә һыу тигеҙеү ҙә етә. Сөнки ҡатын – ҡыҙҙар өсөн сәс зиннәт. Уларға сәстәрен алдырыу йә ҡыҫҡартыу дөрөҫ түгел.

ҒӨСӨЛЛӘНЕҮҘЕ ФАРЫЗ ИТКӘН СӘБӘПТӘР

Ғөсөлләнеүҙе фарыз иткән сәбәптәр өс:

1. Жөнөб булыу:
   а) енес ағзаларынан еүешлек килеү;
   б) енси яҡынлыҡ ҡылыу;
   в) шәһүәтләнеү арҡаһында төшләнеү.
2. Хәиз (күрем) тамамланыуы.
3. Нифас ҡаны (бала тыуғандан һуң) тамамланыуы.

Ғәсәлһеҙ кеше пак булмай. Уға Ҡөрьән Кәримде тотоу, ҡарап йәки яттан уҡыу һәм мәсеткә инеү кеүек эштәр тыйыла. Шуның өсөн уға мөмкин тиклем тиҙерәк ғәсәлләнеп, пакланыу тейеш булыр. Әммә тәһәрәтһеҙ кешегә Ҡөрьән Кәримде тотоу мәкруһ булһа ла, Ҡөрьәнде яттан уҡыу мәкруһ түгел. Доға ҡылыу, сәләм биреү, сәләм ҡайтарыу һәм тәсбихтәр әйтеү жөнөб кешегә лә, тәһәрәтһеҙ кешегә лә дөрөҫ.

ҠИБЛА

Намаҙҙы ҡибла тарафына йүнәлеп уҡыу фарыз. Ҡибланың ҡайһы тарафта икәнен белә тороп та, намаҙҙы башҡа тарафҡа йүнәлеп уҡыу һис дөрөҫ түгел.

Мосолмандарҙың ҡиблаһы – Сәғүд Ғәрәпстаны Мәккә ҡалаһындағы Ҡәғбә исемле мөбәрәк йорт.

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

Тәүлегенә биш ваҡыт намаҙҙы теүәл билдәләнгән ваҡыттарында уҡырға кәрәк.

1. Иртәнге намаҙ. Уның ваҡыты – таң аткандан алып, ҡояш ҡалҡа башлағанға тиклем дауам итә.

Ул 2 рәкәғәт сөннәт, 2 рәкәғәт фарыз итеп уҡыла.

2. Өйлә намаҙы. Уның ваҡыты – ҡояш зәүәлдән (зениттан) үткәндән башлап, икенде ваҡытына тиклем дауам итә.

Ул 4 рәкәғәт сөннәт, 4 рәкәғәт фарыз, 2 рәкәғәт сөннәт итеп уҡыла.

3. Икенде намаҙы. Уның ваҡыты – һәр нәмәнең күләгәһе үҙенән ике тапҡыр оҙонайғандан алып, ҡояш байый башлағанға тиклем дауам итә.

Ул 4 рәкәғәт фарыз итеп уҡыла.

4. Аҡшам намаҙы. Уның ваҡыты – ҡояш байығандан һуң, киске шәфәҡ ҡыҙыллығы бөткәнгә тиклем дауам итә.

Ул 3 рәкәғәт фарыз, 2 рәкәғәт сөннәт итеп уҡыла.

5. Йәстү намаҙы. Уның ваҡыты – киске шәфәҡ ҡыҙыллығы бөткәндән алып, төн уртаһына тиклем дауам итә.

Ул 4 рәкәғәт фарыз, 2 рәкәғәт сөннәт итеп уҡыла. Аҙаҡтан 3 рәкәғәт витр – үәжиб намаҙы ҡушып уҡыла.

НАМАҘ УҠЫУ ТЫЙЫЛҒАН ВАҠЫТТАР

Ҡояш офоҡта күренә башлағандан алып, тамам ҡалҡып бөткәнгә тиклем намаҙ уҡырға ярамай. Шулай уҡ, ҡояш байый башлағандан алып, тамам офоҡ артына киткәнсе, намаҙ уҡыу тыйыла.

Зәүәл ваҡытында, йәғни ҡояш зәүәлдән алып, бер аҙ ауыша башлағанға тиклем намаҙ уҡыу рөхсәт ителмәй.

Әгәр бер кеше үҙенең иғтибарһыҙлығы арҡаһында онотоп йәки йоҡлап, намаҙын ҡалдырһа, ул уны иҫенә төшөргәс тә йәки уянғас

та, ҡаза итеп уҡырға тейеш.

Фарыз намаҙына ҡамәт әйтелгәндән һуң, сөннәт намаҙын уҡырға тотонорға ярамай.

АҘАН

Аҙан – ул намаҙға саҡырыу. Йома йәки биш ваҡыт намаҙҙарҙың ваҡыттары ингәс, ҡысҡырып аҙан һәм фарыз намаҙҙарҙы уҡыр алдынан ҡамәт әйтеү сөннәт ғәмәлдәрҙән һанала.

Ҡатын – ҡыҙҙар аҙан һәм ҡамәт әйтмәҫтәр.

Аҙан ҡысҡырып һәм һуҙып, түбәдәгесә әйтелә:

«Аллааһу әкбәр». (4 тапҡыр)

«Әшһәду әл-ләә иләәһә иллаллааah». (2 тапҡыр)

«Әшһәду әннә Мүхәммәдәр – расүүлүл лааah». (2 тапҡыр)

«Хәййә ғәләс –саләәәh». (2 тапҡыр)

«Хәййә ғәләл –фәләәәх». (2 тапҡыр)

«Аллааһу әкбәр». (2 тапҡыр)

«Ләә иләәһә илләллааah».(1 тапҡыр)

Иртәнге намаҙға аҙан әйткәндә, ***«Хәй йә ғәләл – фәләәәх»*** тигәндән һуң, 2 тапҡыр ***«Әс-саләәтү хәйрум–минән–нәүүм»*** тигән һүҙҙәр өҫтәп әйтелә.

Аҙанды ишеткән кеше ***«Хәййә ғәләс – саләәәh»*** тигәнгә тиклем, аҙан һүҙҙәрен үҙ алдына, эстән генә мөәәзин артынан ҡабатлап барырға тейеш. ***«Хәй йә ғәләл –фәләәәх»,*** тигәндә, ***«Ләә хәүлә үә ләә ҡувүәтә иллә билләәәh»***, тип әйтергә кәрәк.

Аҙандан һуң ошо доға уҡыла:

أَللّٰهُمَّ رَبَّ هٰذِهِ الدَّعْوَةِ التَّامَّةِ الصَّلٰوةِ الْقَائِمَةِ اٰتِ مُحَمَّدًا الْوَسِيلَةَ وَ الْفَضِيلَةَ وَ الدَّرَجَةَ الْعَالِيَةَ الرَّافِعَةَ وَابْعَثْهُ مَقَامًا مَحْمُودًا الَّذِى وَعَدْتَهُ وَارْزُقْنَا شَفَاعَتَهُ يَوْمَ الْقِيَامَةِ إِنَّكَ لَا تُخْلِفُ الْمِيعَادِ

Аллааһүммә раббә һәәҙиһид – дәғүәтит – тәәммәти үәс – саләәтил – ҡааимәһ. Әәти Мүхәммәдәнил – үәсииләтә үәл – фәдыыләтә үәд – дәражәтәл – ғәәлийәтәр – раафиғаһ. Үәбғәҫһү мәҡаамән–мәхмүүдәнил–ләҙии үәғәттәһ. Үәрзүҡнәә шәфәәғәтәһү йәүмәл - ҡыйәәмәһ. Иннәкә ләә түхлифүл–миғәәд.

УҠЫЛАСАҠ НАМАҘҘЫ НИЙӘТЛӘҮ

Намаҙ уҡыр алдынан, уҡыласаҡ намаҙҙы күңел менән ниәтләү – фарыз, тел менән ҡайһы намаҙ икәнен атап, ниәтләү – мөстәхәб. Имамға ойоған кеше лә ойоуҙы ниәтләргә тейеш.

Биш ваҡыт намаҙға ошо рәүештә ниәт ҡылына:

«Әғүүҙү билләәһи минәш – шәйтаанир – ражииим. Бисмилләәһир – рахмәәнир – рахииим», – тип намаҙлыҡҡа баҫабыҙ, (1-енсе һүрәт) ***«Әстәғфируллааһ, әстәғфируллааһ, әстәғфируллааһә үә әтүүбү иләйһи»,*** – тип тәүбә итәбеҙ. Күңелдән, ниндәй намаҙҙың, нисә рәкәғәт фарызын йәки сөннәтен уҡыуға ниәт ҡылына һәм үҙ алдыңа ауыҙ эсенән генә: ***«Бисмилләәһир – рахмәәнир – рахииим. Иләһи, бер Үҙеңдең***

ризалығың өсөн (ниндәй) ***намаҙҙың*** (нисә) ***рәкәғәт*** (фарызын йәки сөннәтен) ***уҡырға ниәт ҡылдым,*** (имамға ойоп уҡыһа, ошо урында ***«ойоном ошо имамға»,*** тип өҫтәп әйтелә) ***йөҙөмдө йүнәлдерҙем ҡибла тарафына, хаалисан лилләәһи тәғәләә»,*** – тип әйтәбеҙ. Намаҙлыҡҡа баҫҡас, бары тик сәждәгә барасаҡ урынға ғына ҡарап торабыҙ.

ИРТӘНГЕ НАМАҘҘЫ УҠЫУ ТӘРТИБЕ

Ике рәкәғәт сөннәте

Күңелдән, иртәнге намаҙҙың ике рәкәғәт сөннәтен уҡыйым тип ниәтләп:

«Бисмилләәһир – рахмәәнир – рахииим. Иләһи, бер Үҙеңдең ризалығың өсөн иртәнге намаҙҙың ике рәкәғәт сөннәтен уҡырға ниәт ҡылдым, йөҙөмдө йүнәлдерҙем ҡибла тарафына, хаалисан лилләәһи тәғәләә», – тигәндән һуң, ҡулдарҙы ҡолаҡ тапҡырына (ҡатын – ҡыҙҙар күкрәк тапҡырына) тиклем күтәреп: ***«Аллаһү әкбәр»,*** – тип тәкбир әйтәбеҙ. (1-енсе һүрәт) Был ваҡытта устарыбыҙ асыҡ һәм ҡибла яғына ҡарап торорға тейеш.

Шунан һуң, ҡулдарҙы (ир – аттар – кендек аҫтына, ә ҡатын – ҡыҙҙар күкрәк өҫтенә) бағлайбыҙ (уң ҡулдың баш һәм сәтәкәй бармаҡтары менән һул ҡулды беләҙек тапҡырынан тотоп тороу). (3-өнсе һүрәт) Һәм «Ҫәнә» доғаһын уҡыйбыҙ:

سُبْحَانَكَ اللّٰهُمَّ وَبِحَمْدِكَ وَتَبَارَكَ اسْمُكَ
وَتَعَالَى جَدُّكَ وَلَآ إِلٰهَ غَيْرُكَ

«СүбхәәнәкАллааһүммә үә бихәмдикә үә тәбәракәсмүкә үә тәғәәләә жәддүкә үә ләә иләәһә ғайрук».

«Әғүүзү билләәһи минәш – шәйтаанир – ражииим. Бисмилләәһир – рахмәәнир – рахииим», – тип әғүзү–бисмилләһте әйткәс, «Фәтиха» сүрәһен уҡыйбыҙ:

بِسْمِ اللّٰهِ الرَّحْمٰنِ الرَّحِيمِ
الْحَمْدُ لِلّٰهِ رَبِّ الْعَالَمِينَ 2. الرَّحْمٰنِ الرَّحِيمِ 3. مَالِكِ يَوْمِ
الدِّينِ 4. إِيَّاكَ نَعْبُدُ وإِيَّاكَ نَسْتَعِينُ 5. اهدِنَـــا الصِّرَاطَ
المُسْتَقِيمَ 6. صِرَاطَ الَّذِينَ أَنعَمتَ عَلَيهِمْ غَيرِ المَغضُوبِ
عَلَيهِمْ وَلاَ الضَّالِّينَ

«Әлхәмдү лил ләәһи раббил – ғәәләмииин. Әр–рахмәәнир – рахииим. Мәәлики йәүмид – дииин. Ийәәкә нәғбүдү үә ийәәкә нәстәғииин. Иһдинәс – сырааталь – мүстәҡыыым. Сырааталь – ләҙиинә әнғәмтә ғәләйһим ғайрил – мәғдууби ғәләйһим үә ләд-даааллииин. Әәмиин!»

Бисмилләһте әйтмәйенсә, йәнә бер ҡыҫҡа сүрә йәки Ҡөрьәндән бер – нисә аят ҡушып уҡыйбыҙ, мәҫәлән, «Кәүҫәр» сүрәһен:

بِسْمِ اللّٰهِ الرَّحْمٰنِ الرَّحِيمِ
إِنَّا أَعْطَيْنَاكَ الْكَوْثَرَ 1. فَصَلِّ لِرَبِّكَ وَانْحَرْ
2. إِنَّ شَانِئَكَ هُوَ الْأَبْتَرُ 3

...ҡаинәҙә өгтәйнәкә–кәүҫәр. Ҙәсалли лирабби-кә үәнхәр. Иннә шәәни'әкә һүүвәл – әб(е)тәр».

Шунан, «Аллааһу әкбәр», – тип тәкбир әйтеп, рөкүғкә эйеләбеҙ. (4-енсе һүрәт) Рөкүғтә ҡулдарҙы тубыҡтар өҫтөнә ҡуябыҙ (ҡатын – ҡыҙҙар рөкүғкә яртылаш һәм бер аҙ сүгәләп эйелә) һәм өс тапҡыр: *«Сүбхәәнә раббийәл – ғаҙыйим»,* – тип тәсбих әйтәбеҙ.

Шунан һуң: *«Сәмиғаллааһу лимән хәмидәһ»,* – тип әйтеп, рөкүғтән ҡалҡабыҙ. (1-енсе һүрәт) Турайып баҫҡас: *«Раббәнәә ләкәл – хәмд(е)»,* – тибеҙ һәм *«Аллааһу әкбәр»,* – тип сәждәгә китәбеҙ. (5-енсе һүрәт)

Сәждәгә киткәндә иң башта тубыҡтар, шунан ике ус, һуңынан маңлай менән танау намаҙлыҡҡа терәлә. Сәждәлә бармаҡтар бергә, ҡулдар йөҙ тапҡырында, тубыҡтар бер - береһенән күкрәк киңлеге самаһы алыҫлыҡта, аяҡ суҡтары бер – берһенә тейеп, аяҡ бармаҡтары ерҙән айырылмай, киблаға ҡарап тора. Сәждәлә ир–аттар иркен (ҡултыҡтары асыҡ, ә терһәктәре ергә теймәй тора), ә ҡатын – ҡыҙҙар, киреһенсә, мөмкин тиклем йыйнаҡ ятырға тейеш.

Сәждәлә өс тапҡыр: *«Сүбхәәнә раббийәл – әғләә»,* – тип тәсбих әйтәбеҙ ҙә, *«Аллааһу әкбәр»,* – тип торып ултырабыҙ. (6-ынсы һүрәт) Был ултырыу «жәлсә» тип атала. Бер тәкбир әйтерлек ваҡыт ултырғас, *«Аллааһу әкбәр»,* – тип, икенсе тапҡыр сәждәгә барабыҙ. (5-енсе һүрәт) Сәждәлә өс тапҡыр: *«Сүбхәәнә раббийәл – әғләә»,* – тип

әйтәбеҙ ҙә, ***«Аллааһы әкбәр»,*** – тип торып баҫабыҙ. (3-өнсе һүрәт)

Ошоның менән намаҙҙың беренсе рәкәғәте тамамлана.

Икенсе рәкәғәткә тороп баҫҡас, ҡулдарҙы кендек аҫтына (ҡатын–ҡыҙҙар күкрәктәренә) бағлап, бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен уҡыйбыҙ:

«Бисмилләәһир – рахмәәнир – рахииим.

Әлхәмду лилләәһи раббил – ғәәләмииин. Әр – рахмәәнир – рахииим. Мәәлики йәүмид – дииин. Ийәәкә нәғбүду үә ийәәкә нәстәғииин. Иһдинәс – сырааталь – мүстәкыыым. Сырааталь – ләҙиинә әнғәмтә ғәләйһим ғайрил – мәғдууби ғәләйһим үә ләд-даааллиииин. Әәмиин!».

Бисмилләһте әйтмәйенсә, йәнә бер ҡыҫҡа сүрә йәки Ҡөрьәндән бер – нисә аят ҡушып уҡыйбыҙ, мәҫәлән, «Ихлас» сүрәһен:

بِسْمِ اللهِ الرَّحْمنِ الرَّحِيمِ

قُلْ هُوَ اللَّهُ أَحَدٌ 1 اللَّهُ الصَّمَدُ 2 لَمْ يَلِدْ وَلَمْ يُولَدْ 3

وَلَمْ يَكُن لَّهُ كُفُواً أَحَدٌ

«Куль һүәллааһы әхәд(е). Аллааһыс – самәд(е). Ләм йәлид(е) –үә ләм йүүләд(е). Үә ләм йәкүл – ләһүү күфүән әхәд(е)».

Шунан, ***«Аллааһы әкбәр»,*** – тип тәкбир әйтеп, рөкүғкә эйеләбеҙ. (4-енсе һүрәт) Рөкүғтә ҡулдарҙы тубыҡтар өҫтөнә ҡуябыҙ (ҡатын – ҡыҙҙар рөкүғкә яртылаш һәм бер аҙ сүгәләп эйелә) һәм өс тапҡыр: ***«Сүбхәәнә раббийәл –***

ғазыиим», – тип тәсбих әйтәбеҙ.

Шунан һуң: *«Сәмиғаллааһу лимән хәмидәһ»,* – тип әйтеп, рөкүғтән ҡалҡабыҙ. (1-енсе һүрәт) Турайып баҫҡас: *«Раббәнәә ләкәл – хәмд(е)»,* – тибеҙ һәм *«Аллааһу әкбәр»,* – тип сәждәгә китәбеҙ. (5-енсе һүрәт)

Сәждәлә өс тапҡыр: *«Сүбхәәнә раббийәл–әғлә»,* – тип тәсбих әйтәбеҙ ҙә, *«Аллааһу әкбәр»,* – тип торып ултырабыҙ. (6-ынсы һүрәт) Бер тәкбир әйтерлек ваҡыт ултырғас, *«Аллааһу әкбәр»,* – тип, икенсе тапҡыр сәждәгә барабыҙ. (5-енсе һүрәт) Сәждәлә өс тапҡыр: *«Сүбхәәнә раббийәл – әғлә»,* – тип әйтәбеҙ ҙә, *«Аллааһу әкбәр»,* – тип сәждәнән тороп, (6-ынсы һүрәт) «Әттәхиййәт» менән «Салауат»ты уҡырға ултырабыҙ.

Әттәхиййәт:

«Әттәхиййәәтү лилләәһи үәс – саләүәәтү үәт – тайиибәәт. Әс–сәләәмү ғәләйкә әйүһәннәбийү үә рахмәтүллаәһи үә бәәракәәтүһ. Әс – сәләәмү ғәләйнәә үә ғәләә ғибәәдил – ләәһис – саалихиин. Әшһәдү әл–ләә иләәһә илләллааһу үә әшһәдү әннә Мүхәммәдән ғәбдүһүү үә расүүлүһ».

Салауат:

«Аллааһүммә салли ғәләә Мүхәммәдин үә ғәләә әәли Мүхәммәд, кәмәә салләйтә ғәләә Ибрааһиимә үә ғәләә әәли Ибрааһиимә иннәкә хәмиидүн – мәжиид.

Аллааһүммә бәәрик ғәләә Мүхәммәдин үә ғәләә әәли Мүхәммәд, кәмәә бәәрактә ғәләә

Ибраһиимә үә ғәләә әәли Ибраһиимә иннәкә хәмиидүн – мәжиид».

Салауаттан һуң Раббәнә доғаһын уҡыйбыҙ:

«Раббәнәә әәтинә фид-дүнйәә хәсәнәтән – үә фил–әәхирати хәсәнәтән–үә ҡыинәә ғәҙәәбән–нәәәр».

Шунан, башты иң алда уң яҡҡа, (8-енсе һүрәт) һуңынан һул яҡҡа борып (9-енсе һүрәт): ***«Әс–сәләәмү ғәләйкүм үә рахмәтүллааһ»,*** – тип ике яҡҡа ла сәләм бирәбеҙ. Сәләм биргәндә, күҙҙәр яурын осона ғына ҡарап торорға тейеш.

Шунан һуң: ***«Әстәғфирул лааһә, әстәғфирул – лааһә, әстәғфируллааһә үә әтүүбү иләйһи»***, – тип тәүбә итәбеҙ һәм: ***«Аллааһүммә әнтәс–сәләәмү үә минкәс – сәләәмү тәбәәрактә йә ҙәл–жәләәли үәл – икраам»,*** – тип сәләм доғаһын уҡыйбыҙ. (10-ынсы һүрәт)

Ошоларҙы үтәгәндән һуң, иртәнге намаҙҙың 2 рәкәғәт сөннәте уҡылған булыр.

Иртәнге намаҙҙың 2 рәкәғәт фарызы ла ошо рәүештә башҡарыла. Айырмаһы ниәттәрендә генә, йәғни ниәтләгәндә, ***«...иртәнге намаҙҙың ике рәкәғәт фарызын уҡырға ниәт ҡылдым...»***, – тип әйтелә.

ҠАМӘТ

Фарыз намаҙҙы йәмәғәт менән уҡыр алдынан ир – аттар ҡамәт әйтә. Яңғыҙ уҡыған осраҡта ла ҡамәт әйтеү хәйерле. Әммә ҡатын – ҡыҙҙар ҡамәт әйтмәҫтәр.

Ҡамәт һүҙҙәре, аҙан һүҙҙәре кеүек, ләкин ҡамәттә ***«Хәййә ғәләл-фәләәәх»,*** - тигәндән һуң, ике тапҡыр: ***«Ҡад(е) ҡаамәтис-сәләәһ»,*** – тип әйтелә.

Ҡамәт әйтеүсе, ***«Хәййә ғәләс-сәләәһ»,*** - тигәндә, намаҙға йыйылған халыҡҡа урындарынан торып, намаҙҙы имамға ойоп уҡырға ниәт ҡылыу һәм ***«Ҡад(е) ҡамәтис – сәләәһ»,*** - тигәндә, имам ыңғайына тәкбир әйтеп, намаҙ уҡырға тотоноу мөстәхәб.

НАМАҘ УҠЫУҘЫҢ ҠАЙҺЫ БЕР ҠАҒИҘӘЛӘРЕ

Бөтә иғтибарҙы намаҙға тупларға, алдыңа ғына ҡарап торорға һәм бер яҡҡа ла борғоланмаҫҡа кәрәк.

Намаҙ ваҡытында ашығыуҙан һаҡлан, сөнки ашығыу шәйтандан, намаҙҙың камиллығын юғалта.

Әгәр намаҙ йәмәғәт менән уҡылһа, бөтә хәрәкәтте имам артынан ҡабатла. Әгәр намаҙға һуңлағанында, имам ҡалҡынғанға тиклем рәкүғкә өлгөрһәң, шул рәкәғәткә өлгөргән тип иҫәпләнер. Әгәр өлгөрмәһәң, рәкәғәткә иҫәпләнмәҫ. Бер йәки бер нисә рәкәғәткә һуңлап ҡалған булһаң, өлгөргән рәкәғәтендән башлап, намаҙ бөткәнсе имам артынан эйәр, ләкин имам сәләм биргәндән һуң, уның менән бергә сәләм бирмәй, ҡалдырған рәкәғәттәренде яңғыҙ үҙ алдыңа уҡып тамамла.

Әгәр намаҙҙың үәжип өлөшөн онотоп ҡалдырһаң, йәки уҡылған рәкәғәттәрҙең һанында шиге̧ң булһа, йәки яңылышһаң, бындай осраҡтарҙа намаҙ аҙағында ике мәртәбә сәждә ҡылына. Был онотоу йәки иғтибарһыҙлыҡ аркаһында яңылышҡан өсөн яңылышыу сәждәһе тип атала.

Әттәхиййәттә ултырғанда уң аяҡтың бармаҡ баштары ҡиблаға табан ҡаратып бөгөп ҡуйыла ла, һул аяҡ өҫтөн ултырыла, ә ҡатын – ҡыҙҙар иһә, һул янбаштары менән ергә ултыралар һәм ике аяҡтың да башларын ҡиблаға табан ҡаратып ҡуялар.

Ҡатын – ҡыҙҙар намаҙға аҙан да, ҡамәт тә әйтмәйҙәр.

Фарыз намаҙҙарын ваҡыттары инеү менән уҡы.

Фарыз намаҙын ике кеше уҡыһа, берәһе имам була, икенсәһе иһә уның уң яғына баҫып ойоп уҡый. Имамға ойоп уҡыусылар бер – нисә кеше булһа, улар имамдың артына баҫып ойоп уҡыйҙар. Йәмәғәт намаҙында ҡатын – ҡыҙҙар һәм балалар ҡатнашһа, ирҙәр артынан балалар, улар артынан ҡатын – ҡыҙҙар теҙелә. Ир менән ҡатын бергә уҡыһалар, ҡатыны ирҙең артында тора.

Намаҙҙы имамға ойоп уҡыған кеше «Ҫәнә» доғаһын, рөкүғ, сәждәләге зекерҙәрҙе һәм «Әттәхиййәт» менән «Салауат»ты, шулай уҡ Сәләм доғаһын үҙ алдына эстән уҡый.

Ирҙәр иртәнге һәм йома намаҙҙарының ике рәкәғәт фарызында, шулай уҡ, ахшам һәм йәстү фарыз намаҙҙарының әүәлге ике рәкәғәтендә

Фәтиха сүрәһе менән унан һуң уҡылған сүрәне һәм тәкбир, сәләмдәрҙе ҡысҡырып уҡыйҙар.

Имамға ойоп уҡығанда ла, яңғыҙ уҡығанда ла «Фәтиха» сүрәһенән һуң әйтелә торған «Әәмиин» ҡысҡырмайынса, эстән генә әйтелә.

НАМАҘҘАН ҺУҢ УҠЫЛА ТОРҒАН ЗЕКЕРҘӘР

Намаҙҙы тамамлағас,

سُبْحَانَ اللهِ وَ الْحَمْدُ لِلَّهِ وَ لاَ إِلَهَ إِلاَّ اللهُ وَ اللهُ أَكْبَرُ لاَ حَوْلَ وَ لاَ قُوَّةَ إِلاَّ بِاللهِ الْعَلِيِّ الْعَظِيمِ مَاشَاءَ اللهُ كَانَ وَ مَا لَمْ يَشَاءْ لَمْ يَكُنْ

"Сүбхәәнәллааһи үәлхәмдү лилләәһи үә ләә иләәһә илләллааһү үәллааһү әкбәр. Ләә хәүлә үә ләә ҡүүәтә иллә билләәһил ғәлийийил ғаҙыйм. Мәә шәә Аллааһү кәәнә үә мәә ләм йәшәъ ләм йәкүүн", – *тибеҙ һәм «Аятүл Күрси»ҙе уҡыйбыҙ:*

اللَّهُ لاَ إِلَـهَ إِلاَّ هُوَ الْحَيُّ الْقَيُّومُ لاَ تَأْخُذُهُ سِنَةٌ وَلاَ نَوْمٌ لَهُ مَا فِي السَّمَاوَاتِ وَمَا فِي الأَرْضِ مَن ذَا الَّذِي يَشْفَعُ عِنْدَهُ إِلاَّ بِإِذْنِهِ يَعْلَمُ مَا بَيْنَ أَيْدِيهِمْ وَمَا خَلْفَهُمْ وَلاَ يُحِيطُونَ بِشَيْءٍ مِّنْ عِلْمِهِ إِلاَّ بِمَا شَاء وَسِعَ كُرْسِيُّهُ السَّمَاوَاتِ وَالأَرْضَ وَلاَ يَؤُودُهُ حِفْظُهُمَا وَهُوَ الْعَلِيُّ الْعَظِيمُ*

Әғүүҙү билләәһи минәш-шәйтаанир-раджиим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.

Аллааһү ләә иләәһә иллә һүүәл-хәйүл ҡайүүм. Ләә тәьхүҙүһүү синәтү-үә ләә нәүүм. Ләһүү мәә фис-сәмәәүәәти үә мәә фил-әрд.

Мәнң ҙәлләҙии йәшфәгү ғиңдәһүү иллә биьиҙниһ. Иәгләмү мәә бәйнә әйдииһим үә мәә халфәһүм үә лә йүхытүүнә бишәйьим-мин ғилмиһии иллә бимәә шәә. Үәсиғә күрсийүһүс-сәмәәүәәти үәл-әрд. Үә лә йәьүдүһүү хифҙуһүмә үә һүүәл-ғәлийүл ғаҙыйм.

Бисмилләһте әйтеп: 33 тапҡыр ***«Сүбхәәнәллааһ»***, 33 тапҡыр ***«Әл – хәмдү лилләәһ»*** һәм 33 тапҡыр ***«Аллааһү әкбәр»***, – тип тәсбих әйткәс:

لاَ إِلَهَ إِلاَّ اللهُ وَحْدَهُ لاَ شَرِيكَ لَهُ لَهُ الْمُلْكُ وَلَهُ
الْحَمْدُ وَهُوَ عَلَى كُلِّ شَيْءٍ قَدِيرٌ

«Лә иләәһә илләллааһу үәл – лааһү әкбәр. Лә хәүлә үә лә күүвәтә иллә биллә́әһил – ғалийийил – ғәҙыим», – тип тамамлайбыҙ.

Был зекерҙәрҙән һуң ҡул күтәреп, «тәсбих доғаһы» ҡылабыҙ:

بِسْمِ اللهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ
الْحَيُّ الْقَيُّومُ لاَ تَأْخُذُهُ سِنَةٌ وَلاَ نَوْمٌ اللَّهُ لاَ إِلَـهَ إِلاَّ هُوَ
فِي الأَرْضِ مَن ذَا الَّذِي يَشْفَعُ لَّهُ مَا فِي السَّمَاوَاتِ وَمَا
أَيْدِيهِمْ وَمَا خَلْفَهُمْ وَلاَ عِنْدَهُ إِلاَّ بِإِذْنِهِ يَعْلَمُ مَا بَيْنَ
شَاء وَسِعَ كُرْسِيُّهُ يُحِيطُونَ بِشَيْءٍ مِّنْ عِلْمِهِ إِلاَّ بِمَا
وَهُوَ الْعَلِيُّ السَّمَاوَاتِ وَالأَرْضَ وَلاَ يَؤُودُهُ حِفْظُهُمَا

Аллааһүммә тәҡаббәл миннәә салә́әтәнәә үә сыйәәмәнәә үә ҡыйәәмәнәә үә ҡыйраьәтәнәә үә рукүүғәнәә үә сүджүүдәнәә үә ҡуғүүдәнәә үә тәсбиихәнәә үә тәһлиилә́нә́ә үә тәхашшуғәнә́ә үә тәддарруғәнә́ә. Аллааһүммә тәммим

***тәҡсыранәә үә тәҡаббәл тәмәәмәнәә үәстәджиб дүғәә'әнәә үәғфир әхйәәнәә үәрхәм мәүтәәнәә йәә мәүләәнәә. Аллааһүммәхфәҙнәә йәә хаафиҙ мин джәмииғил-бәләәәйәә үәл-әмраад. Аллааһүммә тәҡаббәл миннәә һәәҙиһис-салләәтәл-фәрда мәғәс-сүннәти мәғә джәмииғи нүҡсаанәәтиһәә бифадликә үә кәраамикә үә лләә тәдрибү биһәә вүджүүһәнәә йәә илләәһәл ғәәләмиинә үә йәә хайран-нәәсыриин. Тәүәффәнәә мүслимиинәә үә әлхиҡнәә бис-саалихиин. Үә салләллааһү тәғәәләә ғәләә хайри халҡыһи Мүхәммәдин үә ғәләә әәлиһии үә әсхәәбиһии әджмәғиин.*

Үәлхәмдү лилләәһи Раббил ғәәләмиин.

Шунан һуң, Ҡөръәндән берәй сүрә йәки бер нисә аят уҡып, үзебеҙ һәм әрүәхтар өсөн доға ҡылабыҙ.

ӘРУАХТАРҒА ДОҒА ҠЫЛЫУ ТӘРТИБЕ

Бисмилләәһир – рахмәәнир – рахииим.

Эй, Раббым! Бер Үҙеңдең ризалығың өсөн уҡылған ошо Ҡөръән аяттарын, уҡыуҙағы хата – кәмселектәребеҙҙе ғәфү итеп, Үҙеңдең киң рәхмәтең менән ҡабул ит. Хасил булған әжер - сауаптарын бөтә ғәләмгә рәхмәт өсөн ебәрелгән бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд Мостафа саллаллааһү ғәләйһи үә сәлләмдең һәм уның ғаилә әһелдәренең рух шәрифтәренә ирештерһәң ине.

Атабыз Әҙәм менән анабыз Һауаның рух шәрифтәренә ирештерһәң ине.

Шулай уҡ, атабыз Әҙәм ғәләйһиссәләмдән алып, Мөхәммәд ғәләйһиссәләмгә тиклем ер йөҙәнә килеп киткән бөтә бәйғәмбәрҙәрҙең, ғәбидтәрҙең, заһидтәрҙең, остаҙҙарыбыҙҙың, мөъмин – мөъминә булып үткән бөтә ата - әсә, инә – бабаларыбыҙҙың рух шәрифтәренә ирештерһәң ине.

Ғәзиз әсәйемдең, ғәзиз атайымдың, ҡәҙерле ҡәйнәм менән ҡайнымдың рух шәрифтәренә ирештерһәң ине.

Ҡәҙерле ҡыҙ туғандарым һәм ир туғандарымдың рух шәрифтәренә ирештерһәң ине.

Өҫтәребеҙҙә хаҡтары булған, ғәйбәттәренә төшкән әруахтарҙың рух шәрифтәренә ирештерһәң ине.

Раббым, уларҙың рухтарын шатландырып, гөнаһ – хаталарын ярлыҡаһаң ине. Әәмиин.

Раббым, Үҙеңдең киң рәхмәтең менән гонаһтарыбыҙҙы ярлыҡа, был донъяла һәм әхирәттә изге маҡсаттарыбыҙға ирешергә насип ит.

Раббым, был донъяла йәшәгән ваҡытыбыҙҙа бәндәләргә мохтаж итмә. Ғәмәл – ғибәҙәт һәм хәйер – ихсан менән йәшәргә насип ит. Тәндәребеҙгә сәләмәтлек, йәндәребеҙгә тыныслыҡ бир. Күңел һәм маңлай күҙҙәребеҙҙе ас. Баштарыбыҙға зирәк зиһен, үткер фекер, камил аҡыл, күркәм холоҡ, йомшаҡ фиғел, тулы иман бир. Әхирәтебеҙгә күскән ваҡыттарыбыҙҙа иманыбыҙҙы юлдаш итеп, аннат үлем бир. Аманат

йәнебеҙҙе биргәндә, йәннәтеңде күреп, рәхмәт фәрештәләренә анһат ҡына тапшырырға насип ит.

Ҡәбергә барып ингәндә, һорау – яуаптарыбыҙҙы еңел бирергә һәм аҙаҡҡы урындарыбыҙҙы йәннәттәрендән алырға насип ит.

Раббәнәә әәтинә фид-дүнйә хәсәнәтән– үә фил –әәхирати хәсәнәтән – үә ҡынәә ғәҙәәбән – нәәр, бирахмәтикә йәә әрхәмәр – раахимиин. Әәмиин.

Ваҡытың булһа, был доғаларҙы һәр бер намаҙҙан һуң уҡырға тырыш.

ӨЙЛӘ НАМАҘЫ

Дүрт рәкәғәт сөннәт

1-нсе рәкәғәттә «Сәнә доғаһы», әғүҙү – бисмилләһте әйткәс, «Фәтиха» сүрәһе һәм Ҡөрьәндән бер нисә аят йәки сүрә (мәҫәлән, «Кәүсәр» сүрәһен) уҡыйбыҙ ҙа, бер рөкүғ һәм ике сәждә ҡылабыҙ.

2-нсе рәкәғәттә торып баҫҡас, бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа сүрәне (мәҫәлән, «Ихлас» сүрәһен) уҡыйбыҙ, бер рөкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт»те уҡыйбыҙ һәм өсөнсө рәкәғәткә торабыҙ.

3-нсө рәкәғәттә Бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа сүрәне уҡыйбыҙ, бер рөкүғ, ике сәждә ҡылғас, дүртенсе рәкәғәткә торабыҙ.

4-нсе рәкәғәттә Бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха»

сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа сүрәне уҡыйбыҙ, бер рәкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт» менән «Салауат»ты, Раббәнә доғаһын уҡыйбыҙ ҙа, ике яҡҡа сәләм биреп, Сәләм доғаһын уҡыйбыҙ. (Намаҙҙа һәр ваҡыт бер үк сүрәләрҙе уҡыу мәкрүһ һанала. Шуға күрә, намаҙ уҡырға өйрәнеү менән бергә күбрәк сүрәләрҙе яттан белергә тырышырға кәрәк).

Дүрт рәкәғәт фарыз

1-нсе рәкәғәттә «Сәнә доғаһы», әғүҙү – бисмилләһте әйткәс, «Фәтиха» сүрәһе һәм Ҡөрьәндән бер нисә аят йәки сүрә (мәҫәлән, «Кәүсәр» сүрәһен) уҡыйбыҙ ҙа, бер рәкүғ һәм ике сәждә ҡылабыҙ.

2-нсе рәкәғәттә торып баҫҡас, бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа сүрәне (мәҫәлән, «Ихлас» сүрәһен) уҡыйбыҙ, бер рәкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт»те уҡыйбыҙ һәм өсөнсө рәкәғәткә торабыҙ.

3-нсө рәкәғәттә Бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен уҡыйбыҙ, бер рәкүғ, ике сәждә ҡылғас, дүртенсе рәкәғәткә торабыҙ.

4-нсе рәкәғәттә Бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен уҡыйбыҙ, бер рәкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт» менән «Салауат»ты, Раббәнә доғаһын уҡыйбыҙ ҙа, ике яҡҡа сәләм биреп, Сәләм доғаһын уҡыйбыҙ.

Ике рәкәғәт сөннәт

1-нсе рәкәғәттә «Çәнә доғаһы», әғүҙү – бисмилләһте әйткәс, «Фәтиха» сүрәһе һәм Ҡөрьәндән бер нисә аят йәки сүрә (мәҫәлән, «Кәүҫәр» сүрәһен) уҡыйбыҙ ҙа, бер рөкүғ һәм ике сәждә ҡылабыҙ.

2-нсе рәкәғәттә торып баҫҡас, бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа сүрәне (мәҫәлән, «Ихлас» сүрәһен) уҡыйбыҙ, бер рөкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт» менән «Салауат»ты, Раббәнә доғаһын уҡыйбыҙ ҙа, ике яҡҡа сәләм биреп, Сәләм доғаһын уҡыйбыҙ.

ИКЕНДЕ НАМАҘЫ

Дүрт рәкәғәт фарыз

1-нсе рәкәғәттә «Çәнә доғаһы», әғүҙү – бисмилләһте әйткәс, «Фәтиха» сүрәһе һәм Ҡөрьәндән бер нисә аят йәки сүрә (мәҫәлән, «Кәүҫәр» сүрәһен) уҡыйбыҙ ҙа, бер рөкүғ һәм ике сәждә ҡылабыҙ.

2-нсе рәкәғәттә торып баҫҡас, бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа сүрәне (мәҫәлән, «Ихлас» сүрәһен) уҡыйбыҙ, бер рөкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт»те уҡыйбыҙ һәм өсөнсө рәкәғәткә торабыҙ.

3-нсө рәкәғәттә Бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен уҡыйбыҙ, бер рөкүғ, ике сәждә ҡылғас, дүртенсе рәкәғәткә торабыҙ.

4-нсе рәкәғәттә Бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха»

сүрәһен уҡыйбыҙ, бер рөкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт» менән «Салауат»ты, Раббәнә доғаһын уҡыйбыҙ ҙа, ике яҡҡа сәләм биреп, Сәләм доғаһын уҡыйбыҙ.

АҠШАМ НАМАҘЫ

Өс рәкәғәт фарыз

1-нсе рәкәғәттә «Ҫәнә доғаһы», әғүҙү – бисмилләһте әйткәс, «Фәтиха» сүрәһе һәм Ҡөрьәндән бер нисә аят йәки сүрә (мәҫәлән, «Кәүҫәр» сүрәһен) уҡыйбыҙ ҙа, бер рөкүғ һәм ике сәждә ҡылабыҙ.

2-нсе рәкәғәттә торып баҫҡас, бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа сүрәне (мәҫәлән, «Ихлас» сүрәһен) уҡыйбыҙ, бер рөкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт»те уҡыйбыҙ һәм өсөнсө рәкәғәткә торабыҙ.

3-нсө рәкәғәттә Бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен уҡыйбыҙ, бер рөкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт» менән «Салауат»ты, Раббәнә доғаһын уҡыйбыҙ ҙа, ике яҡҡа сәләм биреп, Сәләм доғаһын уҡыйбыҙ.

Ике рәкәғәт сөннәт

1-нсе рәкәғәттә «Ҫәнә доғаһы», әғүҙү – бисмилләһте әйткәс, «Фәтиха» сүрәһе һәм Ҡөрьәндән бер нисә аят йәки сүрә (мәҫәлән,

«Кәүсәр» сүрәһен) уҡыйбыҙ ҙа, бер рәкүғ һәм ике сәждә ҡылабыҙ.

2-нсе рәкәғәттә торып баҫҡас, бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа сүрәне (мәҫәлән, «Ихлас» сүрәһен) уҡыйбыҙ, бер рәкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт» менән «Салауат»ты, Раббәнә доғаһын уҡыйбыҙ ҙа, ике яҡҡа сәләм биреп, Сәләм доғаһын уҡыйбыҙ.

ЙӘСТҮ НАМАҘЫ

Дүрт рәкәғәт фарыз

1-нсе рәкәғәттә «Ҫәнә доғаһы», әғүҙү – бисмилләһте әйткәс, «Фәтиха» сүрәһе һәм Ҡөрьәндән бер нисә аят йәки сүрә (мәҫәлән, «Кәүсәр» сүрәһен) уҡыйбыҙ ҙа, бер рәкүғ һәм ике сәждә ҡылабыҙ.

2-нсе рәкәғәттә торып баҫҡас, бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа сүрәне (мәҫәлән, «Ихлас» сүрәһен) уҡыйбыҙ, бер рәкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт»те уҡыйбыҙ һәм өсөнсө рәкәғәткә торабыҙ.

3-нсө рәкәғәттә Бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен уҡыйбыҙ, бер рәкүғ, ике сәждә ҡылғас, дүртенсе рәкәғәткә торабыҙ.

4-нсе рәкәғәттә Бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен уҡыйбыҙ, бер рәкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт» менән «Салауат»ты, Раббәнә доғаһын уҡыйбыҙ ҙа, ике яҡҡа сәләм биреп, Сәләм доғаһын уҡыйбыҙ.

Ике рәкәғәт сөннәт

1-нсе рәкәғәттә «Сәнә доғаһы», әғүзү – бисмилләһте әйткәс, «Фәтиха» сүрәһе һәм Көрьәндән бер нисә аят йәки сүрә (мәсәлән, «Кәүсәр» сүрәһен) уҡыйбыҙ ҙа, бер рөкүғ һәм ике сәждә ҡылабыҙ.

2-нсе рәкәғәттә торып баҫҡас, бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа сүрәне (мәсәлән, «Ихлас» сүрәһен) уҡыйбыҙ, бер рөкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт» менән «Салауат»ты, Раббәнә доғаһын уҡыйбыҙ ҙа, ике яҡҡа сәләм биреп, Сәләм доғаһын уҡыйбыҙ.

ӨС РӘКӘҒӘТ ВИТР НАМАҘЫ

1-нсе рәкәғәттә «Сәнә доғаһы», әғүзү – бисмилләһте әйткәс, «Фәтиха» сүрәһе һәм Көрьәндән бер нисә аят йәки сүрә (мәсәлән, «Кәүсәр» сүрәһен) уҡыйбыҙ ҙа, бер рөкүғ һәм ике сәждә ҡылабыҙ.

2-нсе рәкәғәттә торып баҫҡас, бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа сүрәне (мәсәлән, «Ихлас» сүрәһен) уҡыйбыҙ, бер рөкүғ, ике сәждә ҡылғас, ултырып «Әттәхиййәт»те уҡыйбыҙ һәм өсөнсө рәкәғәткә торабыҙ.

3-нсө рәкәғәттә Бисмилләһте әйтеп, «Фәтиха» сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа сүрәне уҡыйбыҙ ҙа, ҡулдарҙы күтәреп тәкбир әйтәбеҙ һәм уларҙы кире кеңдек аҫтына баглап, Ҡунут доғаһын уҡыйбыҙ:

أَللَّهُمَّ إِنَّا نَسْتَعِيْنُكَ وَ نَسْتَغْفِرُكَ وَ نُؤْمِنُ بِكَ وَ نَتَوَكَّلُ عَلَيْكَ وَ نُثْنِي عَلَيْكَ الْخَيْرَ وَ نَشْكُرُكَ وَ لا نَكْفُرُكَ وَ نَخْلَعُ وَ نَتْرُكُ مَنْ يَفْجُرُكَ أَللَّهُمَّ إِيَّاكَ نَعْبُدُ وَ لَكَ نُصَلِّي وَ نَسْجُدُ وَ إِلَيْكَ نَسْعَى وَ نَحْفِدُ نَرْجُو رَحْمَتَكَ نَخْشَى عَذَابَكَ إِنَّ عَذَابَكَ بِالْكُفَّارِ مُلْحِقٌ

«Аллаһүммә иннәә нәстәғиинүкә, үә нәстәғфирукә, үә нү'мину бикә үә нәтәүәккәлү ғәләйкә үә нүснии ғәләйкәл – хайра нәшкүрукә, үә ләә нәкфүрукә, үә нәхләғү, үә нәтрукү мән – йәфжүрук. Аллаһүммә ийәәкә нәғбүдү, үә ләкә нүсаллии, үә нәсжүду, үә иләйкә нәсғәә, үә нәхфидү, нәржүү рахмәтәкә үә нәхшәә ғәҙәәбәк. Иннәә ғәҙәәбәкә бил – күффәәрил – мүлхик».

Шунан һуң бер рөкүг, ике сәждә кылғас, ултырып «Әттәхиййәт» менән «Салауат»ты, Раббәнә доғаһын укыйбыҙ ҙа, ике якка сәләм биреп, Сәләм доғаһын укыйбыҙ.

Намаҙҙан һуң берәй сүрә йәки аят укып, әруахтарға доға кылабыҙ.

НӘФЕЛ НАМАҘҘАРЫ

Нәфел намаҙҙары шәриғәт тарафынан, намаҙ башка дини ғибәҙәттәр менән сағыштырғанда тәкуалыктың иң юғары күрһәткесе икәнен иҫәпкә алып, фарыз намаҙҙарҙа булыуы мөмкин булған хаталарҙы төҙәтеү өсөн урынлаштырылған.

Аллаһынын Илсеһе Мөхәммәд ғәләйһиссәләм

әйткән: «Мәхшәр көнендә кешенән иң беренсе һорау намаҗы хакында булыр. Әгәр уның намаҗы укылған икән, тимәк, ул кеше хозурлык алыр һәм уңышка ҡаҙаныр, әгәр укылмаған булһа, барыһын да юғалтыр. Фарыз намаҗҗарында кәмселеге булһа, Раббыбыҙ әйтер: «Ҡарағыҙ, Минең ҡолымдың нәфел намаҗҗары юкмы?». Әгәр булһа, фарыз намаҗҗарының хаталары шул нәфел намаҗҗары менән ҡапланыр. Шунан һуң, уның бөтә ғәмәлдәре шуға тиңләнер».

Рәсүлебеҙ Мөхәммәд ғәләйһиссәләм йәнә әйткән: «Фарыз намаҗынан башҡа намаҗҗҗарҙың мәсеттә укылғанға ҡарағанда, өйҙә укылыуы яҡшыраҡ. Сөнки өйҙә ике йөҙләләнеү юк. Һәм шуның аша йортҡа бәрәкәт килер, фәрештәләр һәм рәхмәт инер, ә шәйтан ҡасыр».

НАМАҘ ЭСЕНДӘ УҠЫЛА ТОРҒАН ЗЕКЕР ҺӘМ ДОҒАЛАРҘЫҢ МӘҒӘНӘЛӘРЕ

أَعُوذُ بِاللهِ مِنَ الشَّيْطَانِ الرَّجِيمِ

Әгүүҙү билләәһи минәш–шәйтаанир – ражииим.

Мәғәнәһе: Аллаһының рәхмәтенән һөрөлмеш шәйтандың яуызлығынан Аллаһы Тәғәләгә һыйынам.

بِسْمِ اللهِ الرَّحمنِ الرَّحِيمِ

Бисмилләәһир – рахмәәнир – рахииим.

Мәғәнәһе: Был донъяла бөтә мәхлүктәргә лә, ахирәттә иһә мөъминдәргә генә рәхмәтен

күрһәтеүсе Аллаһ исеме менән.

Аҙан, камәт:

أَللهُ أَكْبَر

Аллааһү әкбәр.

Мәғәнәһе: Аллаһы Тәғәлә һәр нәмәнән олуғ.

أَشْهَدُ أَنْ لاَ إِلَهَ إِلاَّ اللهُ

Әшһәдү әл-ләә иләәһә илләллааһ.

Мәғәнәһе: Шаһитмын, дөрөҫлөктә, Бер Аллаһы Тәғәләнән башҡа һис бер илаһ юҡ.

أَشْهَدُ أَنَّ مُحَمَّدًا رَسُولُ اللهِ

Әшһәдү әннә мүхәммәдәр-расүүлүллааһ.

Мәғәнәһе: Шаһитмын, дөрөҫлөктә, Мөхәммәд ғәләйһиссәләм – Аллаһы Тәғәләнең илсеһе.

حَيَّ عَلَى الصَّلاَة

Хәййә ғәләс-саләәәһ.

Мәғәнәһе: Намаҙға ашығығыҙ.

حَيَّ عَلَى الْفَلاَح

Хәййә ғәләл-фәләәәх.

Мәғәнәһе: Ҡотолоуға ашығығыҙ.

لا إِلَهَ إِلاَّ اللهُ

Ләә иләәһә илләл-лааһ.

Мәғәнәһе: Бер Аллаһы Тәғәләнән башҡа һис бер илаһ юҡ.

أَلصَّلاَةُ خَيْرٌ مِنَ النَّوْم

Әс-саләәтү хайрун-минән-нәүүм.

Мәғәнәһе: Намаҙ йоҡынан хәйерлерәк.

قد قام الصلاة

Кад(е) каамәтис-саләәәһ.

Мәгәнәһе: Дөрөҫлөктә, намаҙ уҡыла башланы.

Аҙан доғаһы:

أَللّٰهُمَّ رَبَّ هٰذِهِ الدَّعْوَةِ التَّامَّةِ الصَّلٰوةِ الْقَائِمَةِ اٰتِ مُحَمَّدًا الْوَسِيلَةَ وَ الْفَضِيلَةَ وَ الدَّرَجَةَ الْعَالِيَةَ الرَّافِعَةَ وَابْعَثْهُ مَقَامًا مَحْمُودًا الَّذِى وَعَدْتَهُ وَارْزُقْنَا شَفَاعَتَهُ يَوْمَ الْقِيَامَةِ إِنَّكَ لَا تُخْلِفُ الْمِيعَادِ

Аллаһүммә раббә һәәҙиһид – дәғүәтит – тәәммәти үәс – саләәтил – ҡааимәһ. Әәти Мүхәммәдәнил – үәсииләтә үәл – фәдыыләтә үәд – дәражәтәл – ғәәлийәтәр – раафиғаһ. Үәбғәҫһү мәҡаамән-мәхмүүдәнил-ләҙии үәғәттәһ. Үәрзүкнәә шәфәәғәтәһү йәүмәл - ҡыйәәмәһ. Иннәкә ләә түхлифүл-миғәәд.

Мәгәнәһе: Әй, ошо камил аҙандың хужаһы Аллаһы Тәғәлә, Мөхәммәд ғәләйһиссәләмгә ярҙамсылыкты һәм артыклыкты, юғары һәм өҫтөн булған дәрәжәне бир! Һәм уны Үҙең вәғәҙә иткән мактаулы урынға ирештер! Һәм ҡиәмәт көнөндә беҙгә уның шәфәғәтен насип ит! Дөрөҫлөктә, Һин вәғәҙәңә һис хилафлык ҡылмайһың.

خالصا لله تعلي

Халисан лилләһи тәғәлә

Мәгәнәһе: Раббым, Һинең ризалығың өсөн.

Çәнә:

سُبْحَانَكَ اللّٰهُمَّ وَبِحَمْدِكَ وَتَبَارَكَ اسْمُكَ
وَتَعَالَى جَدُّكَ وَلَآ إِلٰهَ غَيْرُكَ

Сүбхәәнәкәллааһүммә үә бихәмдикә үә тәбәәракәсмүкә үә тәгәәлә джәддүкә үә лә иләәһә ғайрук.

Мәғәнәһе: Әй, Аллаһ, Һинең паклығыңды һәм мактаулығыңды беләмен. Һинең исемең мөбәрәк һәм дәрәжәң олуғ. Һинән башка һис бер илаһ юк.

Фәтиха сүрәһе:

بِسْمِ اللّٰهِ الرَّحْمٰنِ الرَّحِيْمِ
الْحَمْدُ لِلّٰهِ رَبِّ الْعَالَمِينَ 2. الرَّحْمٰنِ الرَّحِيمِ 3. مَالِكِ يَوْمِ الدِّينِ 4. إِيَّاكَ نَعْبُدُ وإِيَّاكَ نَسْتَعِينُ 5. اهدِنَا الصِّرَاطَ المُستَقِيمَ 6. صِرَاطَ الَّذِينَ أَنعَمتَ عَلَيهِمْ غَيرِ المَغضُوبِ عَلَيهِمْ وَلاَ الضَّالِّينَ

Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.

Әлхәмдү лилләәһи Раббил-ғәәләмиин. Әр-рахмәәнир-рахиим. Мәәлики йәүмид-диин. Ийәәкә нәғбүдү үә ийәәкә нәстәғиин. Иһдинәс-сыраатал-мүстәкыым.

Сыраталләзиинә әнғәмтә ғәләйһим ғайрил-мәғдууби ғәләйһим үәләд-даааллиин. Әәмиин.

Мәғәнәһе: Мактау, дөрөҫлөктә, ғәләмдәрҫең тәрбиәсеһе булған Аллаһ өсөн генә, Рахмән сифатлы Аллаһ донъялағы бөтә йән эйәләренә,

шул иҫәптән кешеләргә лә, Үҙенең ниғмәттәренән файҙаланырға рәхсәт бирҙе. Аллаһ Үҙенең Рахим сифаты менән әхирәттә мәъминдәргә генә рәхмәтен күрһәтеүсе, һәм Дин көненең батшаһы өсөн сын мактау. Фәкәт Һиңә генә ғибәҙәт ҡылабыҙ. Шулай уҡ, фәкәт Һинән генә ярҙам һорайбыҙ. Беҙҙе тоғро юлға төшөр – Үҙең ниғмәтләндергән кешеләрҙең, асыуың төшмәгән һәм аҙашмағандарҙың юлына! Доғамды ҡабул ит!

Кәүҫәр сүрәһе.

بِسْمِ اللهِ الرَّحْمنِ الرَّحِيمِ

إِنَّا أَعْطَيْنَاكَ الْكَوْثَرَ 1. فَصَلِّ لِرَبِّكَ وَانْحَرْ 2. إِنَّ شَانِئَكَ هُوَ الْأَبْتَرُ 3

Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.

Иннәәәә әғтайнәәкәл-кәүҫәр. Фәсалли лираббикә үәнхәр. Иннә шәәниьәкә һүүәл-әб(е)тәр.

Мәғәнәһе: Рахмән һәм Рахим сифатлы Аллаһ исеме менән. Ысынбарлыҡта, Беҙ һиңә Кәүҫәрҙе бирҙек. Раббың – Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн генә намаҙ уҡы һәм ҡорбан сал. Әлбиттә, һинең дошманың киләсәктән мәхрүм.

سُبْحَانَ رَبِّيَ الْعَظِيمِ

Сүбхәәнә раббийәл–ғаҙыиим.

Мәғәнәһе: Олуғ Раббымды пак тип беләм.

سَمِعَ اللهُ لِمَنْ حَمِدَهُ

Сәмиғаллааһу лимән хәмидәһ.

Мәғәнәһе: Аллаһы Тәғәлә Үҙен мактаған кешенең мактауын ишетә.

رَبَّنَا لَكَ الْحَمْدُ

Раббәнәә ләкәл–хәмд(е).

Мәғәнәһе: Әй, Раббыбыҙ, бөтә мактау Һиңә генә.

سبحان ربي الأعلي.

Сүбхәәнә раббийәл – әғләә.

Мәғәнәһе: Иң юғары булыусы Раббымды пак тип белөм.

Ихлас сүрәһе.

بِسْمِ اللهِ الرَّحْمنِ الرَّحِيمِ

قُلْ هُوَ اللَّهُ أَحَدٌ 1. اللَّهُ الصَّمَدُ 2. لَمْ يَلِدْ و

لَمْ يُولَدْ 3. وَلَمْ يَكُن لَّهُ كُفُواً أَحَدٌ.

Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.

Куль һүүәллааһу әхәд(е). Аллааһүс-самәд(е). Ләм йәлид(е) үә ләм йүүләд(е). Үә ләм йәкүлләәһүү күфүүән әхәд(е).

Мәғәнәһе: Рахмән һәм Рахим сифатлы Аллаһ исеме менән. «Ул Аллаһы Тәғәлә – Бер!» – тип әйт. Һәм Ул – Аллаһы Тәғәлә Мәңгелек. Бөтә мәхлүктәр Уға мохтаж. Үҙенең иһә, һис бер нигә мохтажлығы юк. Ул – Аллаһы Тәғәлә бер кемде тыуҙырманы, Үҙе лә бер кемдән тыуманы, һәм

Уга һис кем тиңдәш булманы.

Әттәхиййәт:

التحيات لله و الصلاوات و الطيبات* السلام عليك أيها النبي و رحمة الله و بركاته * السلام علينا و علي عباد الله الصالحين * أشهد أن لا إله إلا الله و أشهد أن محمدا عبده و رسوله *

Бисмилләәһир-рахмәнир-рахим.

«Әттәхиәтү лилләәһи үәс-саләүәәтү үәт-тайиибәәт. Әссәләәмү ғәләйкә әйүһән-нәбийү үә рахмәтүллааһи үә бәракәәтүһ. Әссәләәмү ғәләйнәә үә ғәләә ғибәәдил-ләәһис-саалихиин. Әшһәдү әллә иләәһә илләллааһү үә әшһәдү әннә Мүхәммәдән ғәбдүһүү үә расүүлүһ.

Мәғәнәһе: Тел ғибәҙәттәре лә, тән ғибәҙәттәре лә, мал ғибәҙәттәре лә һәр береһе Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн. Әй, бәйғәмбәребеҙ, һиңа Аллаһы Тәғәләнең сәләме, рәхмәте һәм бәрәкәттәре булһын. Шулай уҡ, беҙгә һәм Аллаһы Тәғәләнең һәр бер изге бәндәләренә лә сәләм булһын. Шаһитмын, дөрөҫлөктә, Аллаһы Тәғәләнән башҡа һис бер илаһ юҡ һәм Мөхәммәд ғәләйһиссәләм Аллаһы Тәғәләнең ҡолы һәм илсеһе.

Салауат:

أَللَّهُمَّ صل علي محمد و علي آل محمد. كما

صليت علي إبراهيم و علي آل إبراهيم إنك حميد المجيد. أَللّٰهُمَّ بارك علي محمد و علي آل محمد. كما باركت علي إبراهيم و علي آل إبراهيм إنك حميد المجيد

Аллаһүммә салли ғәләә Мүхәммәдин үә ғәләә әәли Мүхәммәд. Кәмәә салләйтә ғәләә Ибраһиимә үә ғәләә әәли Ибраһиимә иннәкә хәмиидүн мәджиид. Аллаһүммә бәәрик ғәләә Мүхәммәдин үә ғәләә әәли Мүхәммәд. Кәмәә бәәрактә ғәләә Ибраһиимә үә ғәләә әәли Ибраһиимә иннәкә хәмиидүн мәджиид.

Мәғәнәһе: Әй, Раббым, Ибраһим ғәләйһиссәләмгә һәм уның әһленә рәхмәтеңде күрһәткән кеүек, Мөхәммәд ғәләйһиссәләмгә һәм уның әһленә лә рәхмәтеңде күрһәт! Дөрөҫлөктә, Һин Мактаулы һәм Олуғ. Әй, Раббым, Ибраһим ғәләйһиссәләмгә һәм уның әһленә бәрәкәт биргән кеүек, Мөхәммәд ғәләйһиссәләмгә һәм уның әһленә лә бәрәкәт бир! Дөрөҫлөктә, Һин Мактаулы һәм Олуғ.

Раббәнә:

رَبَّنَا آتِنَا فِي الدُّنْيَا حَسَنَةً وَفِي الآخِرَةِ حَسَنَةً وَقِنَا عَذَابَ النَّارِ

Раббәнәә әәтинә фиддүнйәә хәсәнәтән-үә фил әәхыйрати хәсәнәтән-үә кыйнәә ғәҙәәбәннәәр.

Мәғәнәһе: Әй, Раббыбыҙ, беҙгә был донъяла ла,

әхирәттә лә изгелектәр бир! Һәм беҙҙе йәһәннәм ғазабынан һаҡла!

السلام عليكم و رحمة الله و بركاته

Әс–сәләәмү ғәләйкүм үә рахмәтүллааһ.

Мәғәнәһе: Һеҙгә Аллаһы Тәғәләнең сәләме үә рәхмәте булһын.

Сәләм догаһы:

اللهم أنت السلام و منك السلام
تباركت يا ذالجلال و الإكرام

Аллааһүммә әнтәс-сәләәмү үә минкәс-сәләәмү тәбәәрактә йәә ҙәл-жәләәли үәл-икрам.

Мәғәнәһе: Әй, Раббым, Һин һәр бер бәләләрҙән һаҡлаусыһың, һәр бер сәләмәтлек Һинән генә. Мөбәрәкһең, әй, Олуғлыҡ һәм Хөрмәт эйәһе булған зат – Аллаһы Тәғәлә.

Биш вакыт намаҙҙан һуң уҡылған зекерҙәр:

سُبْحَانَ اللهِ وَ الْحَمْدُ لِلّٰهِ وَ لاَ إِلٰهَ إِلاَّ اللهُ وَ اللهُ أَكْبَرُ

Сүбхәәнәллааһи үәл-хәмдү лилләәһи үә лаә иләәһә илләллааһү үәллааһү әкбәр.

Мәғәнәһе: Аллаһы Тәғәлә кәмселектәрҙән пак. Бөтә мактау Аллаһы Тәғәләгә хас. Бер Аллаһы Тәғәләнән башҡа һис бер илаһ юк. Аллаһ һәр нәмәнән олуғ.

لا حَوْلَ وَ لاَ قُوَّةَ إِلاَّ بِاللهِ الْعَلِيِّ الْعَظِيمِ

Лаә хәүлә үә лаә ҡүввәтә иллаә билләәһил-ғәлийыйл ғаҙыйм.

ғәлиййил ғаҙыйм.

Мәғәнәһе: Олуғ һәм Юғары Аллаһы Тәғәләнән башҡа һис бер көс һәм ҡеүәт юҡ.

Аятүл көрси:

أَعُوذُ بِاللهِ مِنَ الشَّيْطَانِ الرَّجِيمِ

بِسْمِ اللهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ اللّهُ لاَ إِلَـهَ إِلاَّ هُوَ الْحَيُّ الْقَيُّومُ لاَ تَأْخُذُهُ سِنَةٌ وَلاَ نَوْمٌ لَّهُ مَا فِي السَّمَاوَاتِ وَمَا فِي الأَرْضِ مَن ذَا الَّذِي يَشْفَعُ عِنْدَهُ إِلاَّ بِإِذْنِهِ يَعْلَمُ مَا بَيْنَ أَيْدِيهِمْ وَمَا خَلْفَهُمْ وَلاَ يُحِيطُونَ بِشَيْءٍ مِّنْ عِلْمِهِ إِلاَّ بِمَا شَاء وَسِعَ كُرْسِيُّهُ السَّمَاوَاتِ وَالأَرْضَ وَلاَ يَؤُودُهُ حِفْظُهُمَا وَهُوَ الْعَلِيُّ الْعَظِيمُ*

Әғүүҙү билләәһи минәш-шәйтаанир-раджиим.

Бисмилләәһир – рахмәәнир - рахиим.

АллаһҮ ләә иләәһә илләә һүәл-хәййүл-ҡаййүүм. Ләә тәьхуҙүһүү синәтү-үә ләә нәүүм. Ләһүү мәә фис-сәмәәүәәти үә мәә фил-әрд. Мәнң ҙәлләҙии йәшфәғү ғинңдәһүү илләә би-иҙниһ. Иәгләмү мәә бәйнә әйдииһим үә мәә халфәһүм үә ләә йүхыйтүүнә бишәйьим-мин ғилмиһии илләә бимәә шәә. Үәсиғә күрсийүһүс-сәмәәүәәти үәл-әрд. Үә ләә йәьүүдүһүү хифҙуһүмәә үә һүәл-ғәлиййүл-ғаҙыйм.

Мәғәнәһе: Аллаһы Тәғәләнән башҡа һис бер илаһ юҡ, Ул – мәңге тере, ғәләмдәрҙең һәр бер эшен тәдбир ҡылыусы. Унда йоҡымһырау һәм йоҡлау булмаҫ. Ерҙә һәм күктәрҙә булған бөтә

йоклау булмаҫ. Ерҙә һәм күктәрҙә булған бөтә нәмә Уныкы. Кем Уның ҡаршыһында шәфәғәт ҡыла алыр? Һис кем, бары тик Уның рөхсәте менән генә ҡыла алыр. Аллаһы Тәғәлә элек булған нәмәләрҙе лә, уларҙан һуң буласаҡ нәмәләрҙе лә белә. Улар Ул белгән нәмәләрҙең береһен дә белә алмаҫтар, бары тик Ул теләгән тиклем генә белерҙәр. Уның тәхете ер һәм күктәрҙе һыйҙыра. Ер һәм күктәрҙе һаҡлау Аллаһы Тәғәләгә һис ауыр түгел. Ул – Олуғ һәм Бөйөк.

Тәсбих доғаһы:

اللّٰهُمَّ تَقَبَّلْ مِنَّا صَلَاتَنَا وَ صِيَامَنَا وَ قِيَامَنَا وَ قِرَاءَتَنَا وَ رُكُوعَنَا وَ سُجُودَنَا وَ قُعُودَنَا وَ تَسْبِيحَنَا وَ تَهْلِيلَنَا وَ تَخَشُّعَنَا وَ تَضَرُّعَنَا. اللّٰهُمَّ تَمِّمْ تَقْصِيرَنَا وَ تَقَبَّلْ تَمَامَنَا، وَ اسْتَجِبْ دُعَاءَنَا وَ اغْفِرْ أَحْيَاءَنَا وَ ارْحَمْ مَوْتَانَا يَا مَوْلَانَا. اللّٰهُمَّ احْفَظْنَا يَا فَيَّاضَ مِنْ جَمِيعِ الْبَلَايَا وَالْأَمْرَاضِ. اللّٰهُمَّ تَقَبَّلْ مِنَّا هٰذِهِ الصَّلَاةَ (الفرض مع السنّة) مَعَ جَمِيعِ نُقْصَانَاتِهَا، بِفَضْلِكَ وَكَرَمِكَ وَلَا تَضْرِبْ بِهَا وُجُوهَنَا يَا إِلٰهَ الْعَالَمِينَ وَ يَا خَيْرَ النَّاصِرِينَ. تَوَفَّنَا مُسْلِمِينَ وَ أَلْحِقْنَا بِالصَّالِحِينَ. وَ صَلَّى اللّٰهُ تَعَالَى عَلَى خَيْرِ خَلْقِهِ مُحَمَّدٍ وَعَلَى آلِهِ وَ أَصْحَابِهِ أَجْمَعِينَ.

Аллаһүммә тәҡаббәл миннәә саләәтәнәә үә сыййәәмәнәә үә ҡыййәәмәнәә үә ҡыраәәтәнәә үә рукүүгәнәә үә сүджүүдәнәә үә ҡуғүүдәнәә үә

ҡуғуҙдәнәә үә тәсбиихәнәә үә тәһлиләнәә үә тәхашшуғәнәә үә тәддарруғәнәә. Аллааһүммә тәммим тәҡсыыранәә үә тәҡаббәл тәмәәмәнәә үәстәджиб дуғәә'әнәә үәғфир әхйәәнәә үәрхәм мәүтәәнәә йәә мәүләәнәә. Аллааһүммәхфәҙнәә йәә хаафиҙу мин джәмиигил-бәләәйәә үәл әмраад. Аллааһүммә тәҡаббәл миннәә һәәҙиһис-саләәтәл-фәрда мәғәс-сүннәти мәғә джәмиигә нүҡсаанәәтиһәә бифадликә үә кәраамикә үә лә тәдриб биһәә вүджүүһәнәә йәә иләәһәл-ғәәләмиинә үә йәә хайран-нәәсыриин. Тәүәффәнәә мүслимиинәә үә әлхиҡнәә бис-саалихиин. Үә салләллааһү тәғәәләә ғәләә хайри халҡыһи Мүхәммәдин үә ғәләә әәлиһии үә әсхәәбиһии әджмәғиин.

Мәғәнәһе: Әй, Раббым, беҙҙең намаҙҙарыбыҙҙы, ураҙабыҙҙы, ҡыямыбыҙҙы, ҡыйратыбыҙҙы, рәкүғыбыҙҙы, сәждәләребеҙҙе, ҡағдәләребеҙҙе, тәсбихебеҙҙе, тәһлилебеҙҙе, түбәнселек ҡылыуыбыҙҙы һәм ялбарыуҙарыбыҙҙы ҡабул ит! Әй, Раббым, кәмселектәребеҙҙе Үҙең кисер, тамамлаған ғәмәлдәребеҙҙе һәм доғабыҙҙы ҡабул ит! Әй, Хужабыҙ, тереләребеҙҙе ярлыҡа, үлеләребеҙгә рәхмәтеңде күрһәт! Әй, рәхмәт әйәһе Аллаһ, Үҙ фазылың һәм юмартлығың менән ошо намаҙыбыҙҙы һәр бер кәмселектәре менән ҡабул ит! Уны беҙҙең йөҙөбеҙгә кире ташлама! Әй, бөтә ғәләмдәрҙең Хаҡ Мәғбүде, әй, ярҙам итеүселәрҙең Иң Камиле, беҙҙе мосолман хәлендә вафат ҡылдыр һәм беҙҙе изге кешеләргә

тоташтыр! Һәм халыктарҙың яҡшыһы булған Мөхәммәд ғәләйһиссәләмгә һәм уның әһле үә сәхәбәләренең барыһына ла рәхмәтеңде күрһәт! Мактау, ысынбарлыкта, ғәләмдәрҙең тәрбиәсеһе булған Аллаһ өсөн генә.

Кунут доғаһы:

أَللَّهُمَّ إِنَّا نَسْتَعِيْنُكَ وَ نَسْتَغْفِرُكَ وَ نُؤْمِنُ بِكَ وَ نَتَوَكَّلُ عَلَيْكَ وَ نُثْنِى عَلَيْكَ الْخَيْرَ و نَشْكُرُكَ وَ لا نَكْفُرُكَ وَ نَخْلَعُ وَ نَتْرُكَ من يفجرك أَللَّهُمَّ إِيَّاكَ نَعْبُدُ وَ لَكَ نُصَلِّى وَ نَسْجُدُ وَ إِلَيْكَ نَسْعى وَ نَحْفِدُ نَرْجُو رَحْمَتَكَ نَخْشى عَذَابَكَ إِنَّ عَذَابَكَ بِالْكُفَّرِ مُلْحِقٌ

Аллаһүммә иннәә нәстәғиинүкә үә нәстәғфирукә үә нүъмину бикә үә нәтәүәккәлү ғәләйкә үә нүсни ғәләйкәл- хайра нәшкүрукә үә ләә нәкфүрукә үә нәхләғу үә нәтрукү мән йәфджүрук. Аллаһүммә ийәәкә нәғбүдү үә ләкә нүсаллии үә нәсджүду үә иләйкә нәсғәә үә нәхфиду рахмәтәкә үә нәхшәә ғәҙәәбәкә иннә ғәҙәәбәкә бил-күффәәри мүлхиҡ.

Мәғәнәһе: Әй, Раббым, дөрөҫлөктә, беҙ Һинән ярҙам итеүеңде теләйбеҙ һәм Һинән гөнаһтарыбыҙҙы ярлыҡауыңды һорайбыҙ. Һәм Һиңә инанабыҙ һәм тәүәккәлләп һәр бер эштәребеҙҙе Һиңә тапшырабыҙ. Һәм Һине мактайбыҙ, Һиңә шөкөр итәбеҙ, көфөрлөк ҡылмайбыҙ. Һиңә гөнаһ ҡыла торған кешеләрҙе ташлайбыҙ. Әй, Раббыбыҙ, беҙ Һиңә генә ғибәҙәт

ташлайбыҙ. Әй, Раббыбыҙ, беҙ һиңә генә ғибәҙәт ҡылабыҙ, һинең өсөн генә намаҙ уҡыйбыҙ, сәждә ҡылабыҙ һәм ғибәҙәт ҡылып, һиңә яҡын булырға тырышабыҙ. Рәхмәтеңде өмөт итәбеҙ, ғазабыңдан ҡурҡабыҙ. Дөрөҫлөктә, һинең ғазабың иманһыҙ кешеләргә генә әҙерләнгәндер.

НАМАҘ ХАҠЫНДАҒЫ АЯТ – ХӘҘИСТӘР

«Намаҙҙарын һаҡлап үҙ ваҡытында уҡыусылар хөрмәтләнеүселәр һәм улар юғары дәрәжәлә булырҙар». (Мәғариж – 34).

«Һәм намаҙҙы һаҡла. Дөрөҫлөктә, намаҙ фәхеш һәм гөнаһлы эштәрҙән тыя». (Ғәнкәбүт – 45).

«Намаҙҙарына иғтбарһыҙҙарға ҡайғы – хәсрәт». (Мәғүн – 4).

«Хаҡ, үҙҙәренең намаҙҙарында бойһоноусылар уңышҡа ирешерҙәр». (Мөъминүн – 1).

«Уларҙан һуң яуыз ҡәүем килде, улар намаҙҙарын уҡымайынса, нәфселәренә эйәрҙеләр. Улар – ғазапҡа тарыусылар». (Мәрьям – 59).

«Әй, һеҙ, мөъминдәр! Йома намаҙына аҙан әйтелһә, Аллаһыны иҫкә алырға ашығығыҙ һәм сауҙағыҙҙы ҡалдырып торығыҙ». (Йома – 9).

Мөхәммәд ғәләйһиссәләм әйткән:

«Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, әгәр берәүегеҙҙең өйө алдынан йылға ағып ятһа һәм ул шунда көнөнә биш мәртәбә йыуынһа, шул кешелә бер ниндәй нәжес ҡалыр инеме?». Кешеләр: «Юҡ, бер ниндәй ҙә нәжес ҡалмаҫ ине», – тип яуап биргәндәр. Шунда ул: «Нәҡ бына шулай, биш ваҡыт намаҙ

менән Аллаһ һеҙҙе гөнаһтарҙан таҙарта», - тигән.

«Намаҙ – һеҙҙең һәм беҙҙең аралағы тантаналы ант. Унан баш тартыусы – иманһыҙ».

«Үҙенең иғтибарһыҙлығы арҡаһында өс йома намаҙын ҡалдырған кеше үҙенең күңеленә иманһыҙлыҡ мөһөрөн баҫыр».

«Кем аҙанды ишетеп тә, нигеҙһеҙ сәбәп арҡаһында, намаҙ уҡырға ашыҡмаған икән, шул кешенең намаҙы ҡабул ителмәҫ».

«Йәмәғәт намаҙы, өйҙәге намаҙға ҡарағанда, егерме ете тапҡыр өҫтөнөрәк. Әгәр кеше тейешенсә тәһәрәт алып, намаҙ тураһында ғына уйлап мәсеткә барһа, уның һәр аҙымы һайын дәрәжәһе бер баҫҡысҡа юғары күтәрелә һәм мәсеткә барып ингәнсе бөтә гөнаһы юйыла. Мәсеткә ингәндә кешегә бәрәкәт инә. Мәсеттә ғибәҙәт ҡылған ваҡытта фәрештәләр уға яҡшы теләктәр теләйҙәр һәм: «Әй, Раббыбыҙ, уны ҡыҙған, ғәфү ит! Әй, Раббыбыҙ, уны теләһә ниндәй яуызлыҡтан ҡоткар һәм боҙоҡлоҡтан һаҡла!», – тип әйтәләр».

«Әгәр берәү мәсеткә инһә, ултырыр алдынан ике рәкәғәт намаҙ уҡыһын». Был ике рәкәғәт намаҙ – мәсетте сәләмләү намаҙы тип атала.

«Миңә кейемде һыҙғанырға ҡушылмаған». Йәғни, намаҙ ваҡытында ендәрҙе, балаҡтарҙы һыҙғанырға ярамай.

«Намаҙҙа сафтар тығыҙ булһын, иңдәрегеҙҙе иңгә, аяҡтарығыҙҙы аяҡҡа терәп баҫығыҙ».

«Намаҙға барғанда ашыҡмағыҙ, тейешле

тынлыҡ-ты һаҡлап, олпат рәүештә барығыҙ. Имам ниндәй ғәмәлдә булһа, артынан дауам итегеҙ, үтәлмәй ҡалғанын үҙегеҙ яңғыҙ уҡып тултырырһығыҙ».

«Рөкүғте тулыһынса башҡарығыҙ, турайғансы күтәрелегеҙ. Шунан һуң сәждәгә китегеҙ».

«Сәждәгә китҡәс, терһәктәрегеҙҙе күтәреп, устарығыҙ менән таянығыҙ».

«Ошо өммәттән иң беренсе күтәрелә торған нәмә – намаҙҙағы хошуғлыҡ. Шунда намаҙын хошуғ менән уҡыусы берәүҙе лә күрмәҫһең».

«Дөрөҫлөктө, намаҙҙарын хошуғ менән уҡыусы мөъминдәр ҡотолдо». (Мөъминүн – 1,2).

Хошуғ тип күңелдең йомшарыуына, түбәнселекле хәлдә һәм намаҙға иғтибарлы булыуға әйтелә.

«Рөкүғ, сәждәләрен еренә еткереп үтәмәүсе кеше намаҙ ҡарағы тип атала».

«Көн башында уҡылған ике рәкәғәт Доха намаҙы һәр быуынға саҙаҡа булып тора».

«Сәбәпһеҙ өс йома намаҙын ҡалдырыусы кеше монафиҡ була».

«Фарыздарҙан тыш намаҙҙарҙың өҫтөнөрәге – төнгө намаҙ».

«Төнгө намаҙҙарҙың аҙаҡҡыһы итеп витрҙе уҡығыҙ».

«Мөхәммәд ғәләйһиссәләм уң ҡулының һуҡ бармағын күтәрә ине». (Һуҡ бармаҡтың Әттәхийәттә ултырған ваҡытта, «әшһәдү әллә иләәһә илләллааһ» тигәндә күтәрелеүе, «үә

әшһәдү әннә...» тигәндә төшөүе тураһында һүҙ бара).

АУЫРЫУ КЕШЕНЕҢ НАМАҘЫ

Мосолман ҡәрҙәшем, ауырыу булһаң да, намаҙыңды ҡалдырыуҙан һаҡлан. Бел, намаҙ һиңә ауырыған ваҡытында йән тыныслығы килтерә һәм сәләмәтләнеүгә сәбәпсе була.

Ауырыу кеше лә пакланырға, тәһәрәт алырға һәм ғөсөл ҡойонорға тейеш. Әгәр ауырыу үҙенең хәлһеҙлеге арҡаһында, сирҙе аҙҙырыуҙан ҡурҡһа йәки сәләмәтләнеү әкренәйер тип шөбһәләнһә, ул саҡта ҡом менән паклана ала. Ул тәйәммүм тип атала.

Тәйәммүм ҡылып пакланыу өсөн ике ҡулдың устары менән таҙа тупраҡҡа бер тапҡыр һуғып алырға, һәм шунан һуң, устар менән битте һәм ҡулдарҙы һыпырырға кәрәк. Әгәр ауырыу үҙ – үҙен пакландыра алмаһа, уны икенсе кеше һыу йәки ҡом менән тәһәрәтләндерә.

Тәндең паклана торған өлештәрендә яра булһа, ул һыу менән йыуыла. Һыу менән йыуыу зыян килтерерҙәй булһа, ул аҫза йыуылмай, ә мәсехләнә (йәғни, ҡул суҡтарын һыуға сылатып, һыулы бармаҡтар менән уларҙың йөҙлөгөн бер мәртәбә һыпыра). Яраһы асылып китер тип шөбһәләнһә, бәйләгән сепрәген йәки бинтын мәсехләй .

Ауырыуҙың һынған урындарына ҡабыҡ йәки гипс һалынған булһа, улар аҫтындағы аҫзалар

йыуылмай. Был осраҡта ла ҡабыҡты йәки гипсты мәсехләргә генә кәрәк. Мәсехләү йыуыуҙы алмаштырғанға күрә, ул кеше тәһәрәтле тип иҫәпләнә һәм уға тәйәммүм ҡылыу кәрәкмәй.

Тәйәммүм ҡылыу өсөн туҙан ҡунған теләһә ниндәй таҙа стена һәм башҡа таҙа нәмә менән файҙаланырға мөмкин.

Намаҙ алдынан ҡом менән тәйәммүм ҡылған кеше үҙенең таҙалығын һаҡлаһа, киләһе намаҙын да, икенсе тапҡыр тәйәммүм ҡылмайынса, уҡый ала.

Ауырыу үҙенең тәнен теләһә ниндәй нәжестән һәм бысраҡтан таҙартырға тейеш. Әгәр ҙә ул быны эшләй алмаһа, тәһәрәтһеҙ ҙә намаҙ уҡый ала. Был осраҡта уның намаҙы дөрөҫ тип иҫәпләнә һәм аҙаҡ ҡайтанан намаҙ уҡыу талап ителмәй.

Ауырыу намаҙҙы таҙа кейемдә уҡырға тейеш. Әгәр кейем бысранған икән, уны йыуырға йәки икенсе кейемгә алыштырырға кәрәк. Ундай мөмкинлек булмаһа, бысранған кейемдә лә намаҙ уҡырға мөмкин. Был осраҡта ла намаҙ дөрөҫ буласаҡ һәм уны ҡайтарып уҡырға кәрәкмәй.

Ауырыу намаҙҙы таҙа урында башҡарырға тейеш. Әгәр урын нәжесләнгән булһа, уны йыуырға, башҡа таҙа урын табырға йәки таҙа нәмә йәйергә кәрәк. Быны эшләй алмаһа, ниндәй хәлдә булһа ла намаҙ уҡырға тейешле. Шундай хәлдә уҡылған намаҙы дөрөҫ тип һаналыр һәм уны ҡабат уҡырға кәрәкмәй.

Ауырыуға тәһәрәт ала алмауҙы сәбәп итеп

намаҙҙы кисектерергә йәки ҡалдырырға ярамай. Хатта тән, кейем һәм намаҙ урыны нәжеслә̂нгән һәм таҙартыу мөмкинлеге булмаһа ла, хәленә ҡарап тәһәрәтләнергә һәм билдәләнгән ваҡытта намаҙ уҡырға тейеш.

Ауырыу фарыз намаҙҙы бөкөрәйеп, кәрәк булһа таяҡҡа таянып, баҫҡан килеш булһа ла, уҡырға тейеш.

Әгәр ауырыу ҡыям һәм рөкүғ ваҡыттарында баҫып тора алмай икән, аяҡларын салып ултырған килеш уҡый ала.

Әгәр ауырыу ултырып намаҙ уҡый алмаһа, ҡиблаға йөҙө менән боролоп, ҡырын ятып уҡый ала. Уң яҡҡа ҡырын ятып уҡыу яҡшыраҡ. Әгәр ауырыу ҡиблаға йөҙө менән борола алмай икән, теләһә ҡайһы йүнәлештә уҡыһала була һәм намаҙы дөрөҫ тип иҫәпләнер.

Әгәр ауырыу ҡырын ятып та намаҙ уҡый алмай икән, аяҡтарын ҡибла яғына һуҙып, салҡан ятып уҡый ала. Был осраҡта башты шул йүнәлештә бер аҙ күтәрергә кәрәк. Ундай мөмкинселек тә юҡ икән, ниндәй хәлдә булыуға ҡарамаҫтан, намаҙ уҡырға мөмкин. Был намаҙ ҙа дөрөҫ була һәм уны ҡайтанан уҡырға кәрәкмәй.

Ауырыу намаҙ ваҡытында рөкүғ һәм сәждә ҡылырға тейеш. Әгәр ул быны эшләй алмай икән, ул саҡта башын эйеп ишара яһарға тейеш. Сәждәне ишаралап яһағанда, рөкүғтекенә ҡарағанда, башты ныҡыраҡ эйергә кәрәк.

Әгәр ауырыу рөкүғ яһай ала, ләкин сәждәгә бара алмай икән, ул рөкүғ яһарға, ә сәждәне башын эйеү менән ишара яһарға тейеш.

Әгәр ауырыу сәждәгә бара ала, ләкин рөкүғ ҡыла алмай икән, уға сәждә ҡылырға, ә рөкүғте баш эйеү менән ишара яһарға кәрәк.

Әгәр ауырыу рөкүғ һәм сәждәгә ишара яһарлыҡ хәлдә түгел икән, был осраҡта ул күҙҙәр менән ишара яһарға тейеш.

Әгәр ауырыу бер нисек тә ишара яһай алмай икән, күңеленән тәкбир әйтеп, Көрьән аяттары уҡып, күңеле менән рөкүғ һәм сәждә ҡылырға тейеш.

Әгәр ауырыу үҙенең хәле арҡаһында һәр фарыз намаҙҙы үҙ ваҡытында башҡара алмай икән, ул өйлә һәм икенде намаҙҙарын, шулай уҡ ахшам һәм йәстү намаҙҙарын берләштерә ала. Был осраҡта алдан, йәғни өйләлә икенде намаҙын, ахшам намаҙында йәстү намаҙын бергә уҡырға мөмкин. Шулай уҡ, киреһенсә лә берләштерергә мөмкин, йәғни өйләне икендегә, ә ахшамды йәстүгә ҡалдырып уҡырға мөмкин. Иртәнге намаҙҙы иһә үзеннән алдағы йәки унан һуңғы намаҙ менән берләштереп уҡырға ярамай.

НАМАҘ УҠЫУСЫ АЛДЫНАН ҮТЕҮСЕ КЕШЕ ТУРАҺЫНДА

Аллаһының Илсеһе Мөхәммәд ғәләйһиссәләм әйткән:

«Әгәр намаҙ уҡыусы алдынан үтеүсе кеше үҙен ниндәй бәләләр көткәнен белгән булһа, ул уның намаҙ уҡып бөтөргәнен ҡырыҡ йыл баҫып көтөп торор ине».

Был хәҙис намаҙ уҡыусы алдынан үтеүҙең гөнаһы бик ҡурҡыныс булыуы тураһында һөйләй. Шуға күрә, уның алдынан үтеүҙән һаҡланһындар өсөн, ғибәҙәт ҡылыусының алдына бер билге ҡуйырға кәрәк. Әгәр уны йыраҡтан урап үтһә, ул ваҡытта гөнаһы юҡ.

Рәсүлебеҙ Мөхәммәд ғәләйһиссәләм әйткән:

«Әгәр кем булһа ла намаҙ уҡыусы алдынан көсләшеп үтергә теләһә, уны этеп ебәрергә кәрәк, сөнки ул шәйтан».

ҠӨРЪӘН АЯТТАРЫНДА КИЛГӘН ДОҒА ӨЛГӨЛӘРЕ

Раббәнәә тәҡаббәл миннәә иннәкә әнтәс – сәмииғуль – ғалииим.

Әй, Раббыбыҙ! Беҙҙән ҡабул итеп ал! Хаҡиҡәттә, Һин бит Ишетеүсе һәм бөтәһен дә Белеүсе Зат.

Раббәнәә әәтинәә фид – дүнйәә хәсәнәтәү – үә фил – әәхирати хәснәтәү – үә ҡынәә ғәҙәәбән – нәәәр.

Әй, Раббыбыҙ! Беҙгә был донъяла ла, әхирәттә лә яҡшылыҡты бир. Беҙҙе ут ғазабынан һаҡла!

Раббәнәә ҙаләмнәә әнфүсәнәә үә илләм тәғфир ләнәә үә тәрхәмнәә ләнәкүүнәннәә минәл-

хаасирииин.

Әй, Раббыбыҙ! Беҙ үҙ – үҙебеҙгә золомлоҡ ҡылдыҡ. Әгәр һин беҙҙе ярлыҡамаһаң һәм беҙгә рәхмәт ҡылмаһаң, беҙ, әлбиттә, зыян, зарар күреүселәрҙән буласаҡбыҙ.

Рабби-жғәлнии мүкимәс-саләәти үә миң ҙүрриййәтии Раббәнәә үә тәҡаббәл дүғәә.

Әй, Раббым! Үҙемде һәм нәҫел-ырыуымды, намаҙҙы үҙ ваҡытында уҡыусыларҙан ҡыл! Әй, Раббыбыҙ! Доғаларыбыҙҙы ҡабул ит!

Раббәнәә-ғфир лии үә ли үәәлидәййә үә лилмүъминиинә йәүмә йәҡуумүл-хисәәәб.

Әй, Раббыбыҙ! Хисап буласаҡ көнде үҙемде, ата-әсәмде һәм бөтә мөъминдәрҙе ярлыҡа!

Рабби–рхәмһүмәә кәмәә раббәйәәнии сағиираа.

Әй, Раббым! Мине бәләкәстән шәфҡәт-мәрхәмәт менән тәрбиәләп үҫтергән ата-әсәмә рәхмәт ҡыл!

Рабби-шрах лии садрии үә йәссир лии әмрии.

Әй, Раббым! Күкрәгемде киң ҡыл! Эштәремде еңеләйт!

Рабби зиднии ғилмәә.

Әй, Раббым! Миңә ғилем бир!

Рабби әңзилнии мүңзәләм мүбәәракәү-үә әңтә хайруль-мүңзилииин.

Әй, Раббым! Мине мөбәрәк урынға урынлаштыр! Һин бит урынлаштырыусыларҙың иң хәйерлеһе.

Раббәнәә әәмәннәә фәғфирләнәә үәрхәмнәә

үә әнтә хайрур-раахимииин.

Әй, Раббыбыҙ! Беҙ иман килтереп, мөъминдәрҙән булдык. Беҙҙе ярлыка һәм беҙгә рәхмәт кыл! Һин – рәхмәт кылыусыларҙың иң хәйерлеһе бит.

Раббәнәә һәб ләнәә мин әзүәәжинәә үә ҙүрриййәәтинәә курратә әғйуниу-үәжғәлнәә лил-мүттәкиинә иимәәмәә.

Әй, Раббыбыҙ! Беҙгә күҙҙәребеҙҙе кыуандыра торған тормош иптәше һәм балалар бир! Үҙебеҙҙе тәкүәә мөъминдәргә имам кыл!

Рабби әүзиғнии ән әшкура ниғмәтәкәл-ләтиии әнғәмтә ғәләййә үә ғәләә үәәлидәййә үә ән әғмәлә саалихән тәрдааһү үә әд(е)хилнии бирахмәтикә фии ғибәәдикәс-саалихииин.

Әй, Раббым! Үҙемә һәм ата-әсәмә биргән ниғмәттәреңә шөкөр кылырға һәм Үҙең риза була торған изге ғәмәлдәр кылырға миңа форсат бир! Үҙеңдең рәхмәтең менән мине изге колдарың араһына индер!

Раббәнә-ғфир ләнәә үә ли ихүәәнинә-лләҙиинә сәбәкуунәә бил-иимәән, үә ләә тәжғәл фии күлүүбинәә ғилләл ли-лләҙиинә әәмәнүү, раббәнәә иннәкә рауүфүр – рахииим.

Әй, Раббыбыҙ! Үҙебеҙҙе һәм беҙҙән алда иман менән үткән кәрҙәштәребеҙҙе ярлыка! Мөъминдәргә карата йөрәктәребеҙҙә асыу, нәфрәт тыуҙырма! Әй, Раббыбыҙ! Хаҡиҡаттә, Һин Миһырбанлы, Рахимле Зат бит.

Раббәнәә әтмим ләнәә нүүранәә үәғфир ләнәә,

иннәкә ғәләә күлли шәй-иң ҡадииир.

Әй, Раббыбыз! Беҙгә нурыбыҙҙы тултырып бир! Беҙҙе ярлыҡа. Хаҡиҡәттә, һинең бөтә нәмәгә көсең етә.

ҺҮҘЛЕК

Ғәбид – ғибәҙәт ҡылыусы, ҡоллыҡ итеүсе, табыныусы.

Ғәнһү – унан; уның турында.

Гуаһ – таныҡ, шаһит.

Заһид – донъя эштәренән ваз кисеп, ғибәҙәт менән генә шөғөлләнеүсе ир кеше.

Заһидә – донъя эштәренән ваз кисеп, ғибәҙәт менән генә шөғөлләнеүсе ҡатын кеше.

Истибра – кесе ярау иткәндән һуң, һейҙек юлында ҡалған тамсыларҙың сығып бөткәненә инаныу өсөн йүтәлләп йәки башҡа төрлө хәрәкәттәр яһап, һейҙектән таҙарыныу. Истибра ҡылыу үәжип, сөнки һейҙек тамсылары тәһәрәт алғандан һуң сыкһа, тәһәрәтте боҙалар.

Истинжа – оло йәки кесе ярау иткәндән һуң истибра ҡылып, гәүрәт ағзаларын һыу менән нәжестән таҙартып йыуыу (оло ярау иткәндән һуң, башта берәй төрлө ҡоро нәмә менән, һуңынан һыу менән таҙартырға кәрәк).

Камил – 1. етлеккән, өлгөргән, бәлиғ булған;

2. Тулы; 3. Иң һәйбәт, бөтә ере килешеп торған, бер ниндәй кәмселекһеҙ.

Ҡәлеб – йөрәк, күңел.

Ҡәүем – 1. ырыу, нәҫел, ҡабилә, халыҡ, милләт; 2. төркөм.

Ҡәләм – һүҙ, һөйләм.

Ләзем – кәрәкле, тейешле, зарур.

Мәкруһ – 1. насар күрелгән, һөйкөмһөҙ; 2. дин тарафыннан ҡәтғи тыйылмаған, еңеләә ситкә ҡағылған эш; 3. уҫаллыҡ, яуызлыҡ; 4. йәмһеҙ.

Мәсех – 1. Һыулы ҡул менән һыпырыу; 2. һөртеү.

Мәшаих – 1. ишандар, дин ғалимдәре, тарикәт остаздары; 2. ҡарттар.

Нифас – 1. бала тыуҙырыу; 2. аналыҡ ҡаны, бала тыуҙырғандан һуң килә торған ҡан.

Рәкәғәт – намаҙҙың, аяғүрә тороу, эйелеү һәм маңлай менән танауҙы ергә терәүҙе үҙ эсенә алған бер өлөшө.

Рөкүғ – намаҙҙа ҡулдар менән тубыктарға таянып эйелеп тороу.

Ҫәнә – мактау, мактап әйтелгән һүҙ.

Сәхәбә – Мөхәммәд ғәләйһиссәләмдең замандашы булып, уны күргән кеше.

Тәбиғин – сәхәбәләрҙе күргән кеше.

Тәбғи тәбиғин – сәхәбәләрҙе күргән кешене күргән кеше.

Тәйәммүм – һыу булмағанда ҡулдарҙы тупраҡҡа һуғып «тәһәрәт» алыу.

Хилаф – ҡаршы, ярамаған эш, кире, тиҫкәре.

Хәез – күрем күреү.

Әүләд - 1. бала; 2. Ул (уғыл); 3. Тоҡом, нәҫел.

Бисмилләһир-рахмәнир- рахим.

Мөхтәрәм дин ҡәрҙәштәребеҙ!

"Дәғүәт" нәшриәте һеҙгә сығарған китаптарҙы тәҡдим итә. Әгәр хаталар китһә Аллаһтан ғафу үтенәбеҙ һәм һеҙҙең аңлауығыҙҙы өмөт итәбеҙ. Кемдәр халҡыбыҙ өсөн китаптар тәржемә итеп динебеҙҙе таратырға теләһә беҙҙен менән бәйләнешкә керһен. Китаптар нәшер итеү ниәте булған тәржемәсе-мосолмандарға үҙебеҙҙең ярҙамыбыҙ булыр. Телефондарыбыҙ: 8-903-311-80-53, 8-905-350-58-13, Ишембайҙа (34794) 7-42-23. Шулай уҡ интернеттан бәйләнешкә керергә була: ilchat@mail.ru Интернет-нөсхәһен: www.dagvat.ru сайтынан бушлай күсереп алырға була

Ильшат хәҙрәт Хафизи

Һеҙгә китаптарыбыҙҙы тәҡдим итәбеҙ.

башҡорт телендә:

1. Ҡөрьән кәрим тәфсире
2. Башҡорт мосолман календаре
3. Гонаһтарҙан ҡоҡарыусы доғалар. Тәүбә шарттары
4. Доға ҡылыу тәртибе
5. Имам ағҙам Әбү Хәнифә
6. Исламда әхләҡ
7. Ислам дине
8. Исми ағҙам доғаһы
9. Йәсин сүрәһе
10. Тәүбә ҡылыу тәртибе
11. Күҙ тейеүҙән дауалаусы сүрәләр үә аяттар
12. Ҡөрьән аяттарының фәзыйләттәре
13. Мәстәжәб доғаһы
14. Мөнәжәттәр
15. Мәңгелек йортҡа таба
16. Намаҙ китабы (рәсемдәр менән)
17. Тәрбиәле бала
18. Тәсбих тартыу сауаптары
19. Һәфтиәктәге сүрәләр үә аяттар
20. Шәйех Нәүәиҙең 40 хәҙисе

Рус телендә:

21. О вознаграждении за садака
22. Послушание родителей
23. Лечение болезней маслом черного тмина
24. Пост
25. Сокровенное
26. Целительные молитвы
27. Одежда мусульманской женщины

Татар телендә:

28. Ялган сөйләүдән тыю
29. Азан һәм камәтнең фәзыйләте
30. Жомга намазының фәзыйләте
31. Женаза тәртибе
32. Ислам дине йолалары Һәм башҡалар...

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

ИНЕШ 3
НАМАҘ УҠЫУ КЕМГӘ ЙӨКЛӘТЕЛГӘН 4
ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫҢ КЕЙЕМЕ 4
ТӘҺӘРӘТ 5
ТӘҺӘРӘТТЕ БОҘОУСЫ СӘБӘПТӘР 7
ҒӨСӨЛ 9
ҒӨСӨЛДЕҢ ФАРЫЗДАРЫ 9
ҒӨСӨЛЛӘНҒҮҘЕ ФАРЫЗ ИТКӘН СӘБӘПТӘР 9
ҠИБЛА 10
НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ 10
НАМАҘ УҠЫУ ТЫЙЫЛҒАН ВАҠЫТТАР 11
УҠЫЛАСАҠ НАМАҘҘЫ НИӘТЛӘҮ 13
ИРТӘНГЕ НАМАҘҘЫ УҠЫУ ТӘРТИБЕ 14
ҠАМӘТ. 19
НАМАҘ УҠЫУҘЫҢ ҠАЙҺЫ БЕР ҠАҒИҘӘЛӘРЕ 20
НАМАҘҘАН ҺУҢ УҠЫЛА ТОРҒАН ЗЕКЕРҘӘР… 22
ӘРУАХТАРҒА ДОҒА ҠЫЛЫУ ТӘРТИБЕ 24

ӨЙЛӘ НАМАҘЫ 26
ИКЕНДЕ НАМАҘЫ 28
АХШАМ НАМАҘЫ 29
ЙӘСТҮ НАМАҘЫ 30
ӨС РӘКӘҒӘТ ВИТР НАМАҘЫ 31
НӘФЕЛ НАМАҘҘАРЫ 32
НАМАҘ ЭСЕНДӘ УҠЫЛА ТОРҒАН ЗЕКЕР ҺӘМ ДОҒАЛАРҘЫҢ МӘҒӘНӘЛӘР. 33
НАМАҘ ХАҠЫНДАҒЫ АЯТ-ХӘҘИСТӘР 46
АУЫРЫУ КЕШЕНЕҢ НАМАҘЫ 49
НАМАҘ УҠЫУСЫ АЛДЫНАН ҮТЕҮСЕ КЕШЕ ТУРАҺЫНДА. 52
ҠӨРЪӘН АЯТТАРЫНДА КИЛГӘН ДОҒА ӨЛГӨЛӘРЕ. 53
ҺҮҘЛЕК 56

(1-енсе һүрәт)

тәкбир (2-енсе һүрәт)

киәм (3-өнсе һүрәт)

рөкүг (4-енсе һүрәт)

сәждә (5-енсе һүрәт)

кәгдә (6-ынсы һүрәт)

уң якка сәләм биреү
(8-енсе һүрәт)

һул якка сәләм биреү
(9-ынсы һүрәт)

доға кылыу
(10-ынсы һүрәт)